М. С. Дәүләтшина
Н. Н. Кинйәбаева
Г. М. Садыкова

# 4 БАШҠОРТ ТЕЛЕ

БАШҠОРТ ТЕЛЕ

4

КИТАП


андыҙ
сөйәл үләне
аҡ сәскә
юл япрағы
мәтрүшкә
әрем
кесерткән
йыуа
ҡымыҙлыҡ
балтырған
ҡуҙғалаҡ
ҡаҡы

М. С. ДӘҮЛӘТШИНА, Н. Н. КИНЙӘБАЕВА,
Г. М. САДЫҠОВА

# 4 БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

2-се баҫма

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Д95

**Шартлы тамғалар — Условные обозначения**

**А** — тыңлап аңлау — аудирование

**Т** — төркөмдә эш — работа в группе

**П** — парлап эшләү — работа в паре

**!** — хәтерҙә ҡалдырыу өсөн материал — материал для запоминания

**1** — дәрес һаны — номер урока

— белемде киңәйтеү өсөн материал — материал для расширения кругозора

— актив һүҙлек — активная лексика

— пассив һүҙлек — пассивная лексика

**Дәүләтшина, М. С., Кинйәбаева, Н. Н., Садыҡова, Г. М.**

Д95 Башҡорт теле : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 4-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. — 2-се баҫма / М. С. Дәүләтшина, Н. Н. Кинйәбаева, Г. М. Садыҡова. — Өфө : Китап, 2017. — һүрәттәре менән 152 бит.

ISBN 978-5-295-06804-1

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП—2017**

**ISBN 978-5-295-06804-1**

© Дәүләтшина М. С., Кинйәбаева Н. Н., Садыҡова Г. М., 2016
© Василов А. Ә., һүрәттәр, 2016
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

# Көн дә мәктәпкә барам

## 1 Беренсе сентябрь — Белем көнө!
## Үтелгәндәрҙе ҡабатлау

Т **1.** Белем байрамы тураһында һөйләшеү ҡороғоҙ.



**2.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

### Байрам бөгөн!

Һөйөнсө!
Ҙур байрам бөгөн!
Сәскәле Белем көнө!
Урамдар ҙа, мәктәптәр ҙә
Сәскәләргә күмелде!

Матур сәскәләр тотоп,
Өлкәндәр һәм балалар
Ҡояш ҡына балҡып торған
Мәктәптәргә баралар.

(Факиһа Туғыҙбаева)

1. Беренсе сентябрь ниндәй байрам?
2. Был көндө бөтә илдәрҙәге балалар ҙа байрам итәме?
3. Шиғырҙан башҡорт теленә генә хас булған өндәрҙе тап.

**А** **3.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

## Хәйерле сәғәттә!

Беренсе сентябрь беҙҙең илебеҙҙә оло байрамға әйләнде. Ошо көндө иртәнсәк бөтә ҡала һәм ауыл урамдары сәскәләр тотҡан балалар менән тула. Улар үҙҙәре лә матур кейемдәре менән сәскәләргә оҡшай. Һәр бала шатланып мәктәпкә ашыға. Ололар, ата-әсәләр, уҡытыусылар балаларға уңыштар теләй.

Хәйерле сәғәттә!

(Ғилемдар Рамазанов)

1. Беренсе сентябрь ни өсөн оло байрам?
2. Һеҙҙең мәктәптә байрам нисек үтте?

### Это интересно

Не во всех странах учебный год начинается 1 сентября. В 43 странах уроки начинаются 1 января, а в 16 странах — 1 марта. Самая большая школа находится в Индии. В этой школе получают образование 28 000 учащихся.

**Белем байрамы** — День знаний
**беренсе ҡыңғырау** — первый звонок

**уңыштар теләй** — желают успехов
**ошо көндө** — в этот день
**шатланып** — с радостью

## 2 Мин мәктәпкә ни өсөн йөрөйөм?
## Һөйләм

А **1.** Шиғырҙы тыңла.

### Мин уҡыусы!

Мин уҡыусың,
Һаумы, мәктәп!
Йыр йырлайым,
Һине маҡтап!
Һаумы, һаумы,
Уҡытыусым!
Һин — ҡәҙерле
Өлкән дуҫым!

Һаумыһығыҙ,
Класташтар!
Иң-иң тоғро
Яҡын дуҫтар!
Портфелемә
«Бишле» тулһын!
Һаумы, мәктәп!
Мин уҡыусың!

(Фаҡиһа Туғыҙбаева)

**2.** Һүҙҙәрҙе уҡы, ярҙамсы һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙө.

**Өлгө:** ике уҡыусы, йәшел дәфтәр.

мәктәп, китап, уҡытыусы, уҡыусы, көндәлек, юйғыс, дәфтәр, дәреслек, дәрес, тәнәфес, таҡта, аҡбур, ҡәләм, буяу, уҡыу әсбаптары, ҡыңғырау, класташ, билдә

**Ярҙамсы һүҙҙәр:** яңа, бар, юҡ, уҡый, яҡшы, матур, ҡыҙыл, ҡара, аҡ, һинең.

Т **3.** Тексты уҡығыҙ, һорауға яуап бирегеҙ.

Әминә киләсәктә журналист булырға теләй. Ул «Аҡбуҙат», «Аманат» журналдарына мәҡәләләр яҙа. 1 сентябрь көндө йәш журналист яңы мәҡәләһенә материал йыйырға булды. Ул класташтарына «Һин мәктәпкә ни өсөн йөрөйһөң?» тигән һорау бирҙе.

— Мин мәктәпкә белем алыр өсөн йөрөйөм, — тине уҡыу алдынғыһы Камила, — сөнки минең медицина университетына уҡырға ингем килә.

— Мин мәктәпкә иптәштәремде күрер өсөн киләм, сөнки беҙ тәнәфестә төрлө уйындар уйнайбыҙ, — тине Таһир. Ул уйнарға ярата шул.

— Ә миңә әсәйем йөрөргә ҡуша... — тине Батыр шым ғына.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

Ә һин мәктәпкә ни өсөн йөрөйһөң? Төркөмдә ошо темаға һөйләшеү ҡороғоҙ.

! **Һөйләм** (предложение) тамамланған уйҙы аңлата, уның эсендәге һүҙҙәр бер-береһе менән бәйле була. Башҡорт телендә эш-хәрәкәтте, хәл-торошто белдергән һүҙ һөйләмдең аҙағында килә. Мәҫәлән: Мин Башҡортостанда йәшәйем. Сағыштыр: Я живу в Башкортостане.

**4.** Диалогты уҡы. Фразеологизмдарҙы иҫеңдә ҡалдыр.

— Сәләм, Илгиз! Уҡыуҙар нисек?

— **Тешем-тырнағым менән йәбешеп** уҡыйым. Ә һин?

— Бөгөн яҙма эштән «5» билдәһе алдым. **Түбәм күккә тейгәндәй булды.**

### Это интересно

В российских школах учёба на оценку «5» — похвально, а вот в Чехии «5» — самая плохая оценка. Во Франции 20 балльные оценки, а в Китае — 100 балльные (если меньше 60 — по-нашему «2»). А в Норвегии до 8-го класса никаких оценок не ставят.

**һөйләм** — предложение
**мәҡәлә** — статья
**ҡуша** — велит
**сөнки** — потому что

**ҡәҙерле** — дорогой (-ая, -ое)
**тоғро** — верный (-ая, -ое)
**киләсәктә** — в будущем
**шым ғына** — тихонько
**тешем-тырнағым менән йәбешеп** (фраз.) — изо всех сил
**түбәм күккә тейгәндәй булды** (фраз.) — очень обрадовался (-ась)

## 3 Мин ниндәй дәресте яратам/яратмайым? Һөйләм

А **1.** Шиғырҙы тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Математика дәресендә

Яуап алты килеп сыҡты,
Икегә өстө ҡушҡас.
Мин үҙем дә аптыраным —
Юҡ, былай дөрөҫ булмаҫ!

Ә бишкә алтыны ҡушҡас,
Килеп сыҡты ун ике.
Күршенән күсермәнем дә —
Был яуап та минеке!

Өскә дүртте ҡушҡан инем,
Аптыраным бөтөнләй:
Инде хәҙер ни эшләйем,
Һан икегә бүленмәй!

Математик булып булмаҫ,
Миңә яҡын рус теле!
...Тик сиреккә был дәрестән
Сығыр инде «икеле»!

(Әлфис Ғаязов)

1. Уҡыусы ниндәй предметты яратмай?
2. Математика дәресендә нимә эшләйҙәр?
3. Уҡыусының яратҡан предметы бармы?

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.




тарих дәресе | башҡорт теле дәресе | хеҙмәт дәресе

П **3.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Әминә, һин ниндәй дәресте yратаһың?

— Мин математика дәресен яратам. Математика — фәндәрҙең батшабикәһе, тигән билдәле ғалим Карл Гаусс. Ә һин?

— Ә мин математиканы яратмайым. Ул ауыр дәрес. Мин йыр дәресен яратам. Эй күңелле!

!

**Һөйләм (предложение)**

Хәбәр һөйләм (повествовательное предложение). |___ .
Һорау һөйләм (вопросительное предложение). |___ ?
Өндәү һөйләм (побудительное предложение). |___ !

Башҡорт телендә һорау һөйләм ике төрлө юл менән яһала:

1) һорау алмаштары менән: Һиңә **нисә** йәш?
2) һорау киҫәксәләре ярҙамында: Һиңә ун йәш**ме**?

**4.** Тексты дөрөҫ интонация менән уҡы.

## Кәңәш

Мәктәпкә бер апай килеп инә. Ул Ғарифтан һорай:

— Әйт әле, ҡустым, директорҙы ҡайҙа осратып була?

— Уны табыуы бик еңел, — ти Ғариф, — коридор буйлап шәп итеп йүгерһәгеҙ, ҡаршыға үҙе килә лә сыға.

Это интересно

Знаете ли вы, какова цена лени? За 11 лет обучения в школе ученику приходится работать на уроках в течение 519 750 минут. А если он на каждом уроке отвлекается на 20 минут, то в общей сложности теряет 231 000 минут. Значит после окончания школы его знания находятся на уровне 6—7 классов. Может ли человек с семилетним образованием справиться с современной техникой, робототехникой?

К. Алликметс, А. Метса

**нөктә** — точка
**өндәү билдәһе** — восклицательный знак
**һорау билдәһе** — вопросительный знак
**тирә-як мөхит** — окружающий мир

**ауыр** — трудный (-ая, -ое), тяжёлый (-ая, -ое)
**күңелле** — весело
**батшабикә** — царица

## 4 Мин нимә уҡырға яратам?
## Исем

А **1.** Көләмәсте тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Бер атай уҡытыусынан:

— Минең улым тарихтан нисек уҡый? — тип һорай. — Мин үҙем был предметты яратмай инем.

— Тарих ҡабатлана шул, — тигән уҡытыусы.

(«Мәктәп календары»нан)

1. Уҡытыусының яуабын нисек аңланың?
2. Һин ниндәй предметты яратаһың?

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.




мажаралар тураһында




тарихи әҫәрҙәр




фантастик әҫәрҙәр

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| дуҫлыҡ тураһында | һуғыш тураһында | ғилми китаптар |

П **3.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Радмир, китапханаға бараһыңмы?
— Эйе. Ниндәй китап алырға икән?
— Ә һин нимә тураһында уҡырға яратаһың?
— Мин мажаралар тураһында уҡырға яратам.
— «Электроник мажаралары»н ал. Бик ҡыҙыҡ!
— Мин уның киноһын ҡараным.
— Китап менән кино бер түгел шул. Уҡып ҡара, шунан әйтерһең.

! **Исем** (имя существительное) предмет атамаһын белдерә. **Кем? кемдәр? нимә? нимәләр?** һорауҙарына яуап бирә. Башҡорт телендә **кем?** һорауы тик кешегә генә бирелә: Был кем? Был Әлфиә.

**4.** Тексты уҡы. **Кем? нимә?** һорауҙарына яуап биргән һүҙәрҙе тап.

## Айнурҙың дуҫтары

Айнур күп белә. Уҡытыусының бөтә һорауҙарына ла яуап бирә лә ҡуя.

Тәнәфестә унан Илшат:

— Һин бөтәһен дә ҡайҙан беләһең? — тип һораны.

— Минең дуҫтарым күп, шулар һөйләй, — тине Айнур.
— Алдайһың!
— Ни эшләп алдайым, дәрестән һуң әйҙә беҙгә барабыҙ.
Өйҙә берәү ҙә юҡ ине. Улар Айнурҙың бүлмәһенә үтте. Малай өҫтәлдәге китаптарҙы күрһәтте лә:
— Бына ошолар инде минең дуҫтарым! — тине.

(Венер Исхаҡовтан)

**мажаралар** — приключения
**дуҫлыҡ** — дружба
**һуғыш** — война
**ғилми** — научный (-ая, -ое)
**тарихи** — исторический (-ая, -ое)

**тураһында** — (послелог) о
**әҫәрҙәр** — произведения
**берәү ҙә юҡ ине** — никого не было

## 5 Мин нимә уҡырға ятатам?

## Исем

**А** **1.** Тексты тыңла.

Минең класташым Тимур фәнни китаптар уҡырға ярата. Уның өҫтәлендә химия, физика, биология буйынса энциклопедиялар ята. Ул мәктәптән һуң медицина университетында уҡырға теләй. Тимур стоматолог булырға хыяллана.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

**П** **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Атай, һинең яратҡан китабың бармы?
— Эйе. Мин Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» китабын ятатам.

— Ул нимә тураһында?
— Мостай Кәримдең бала сағы тураһында.
— Ә ни өсөн яратаһың?
— Унда дуҫлыҡ та, һуғыш та, мажаралар ҙа бар.

! Башҡорт телендә **яңғыҙлыҡ** (собственное) һәм **уртаҡлыҡ** (нарицательное) **исемдәр** бар. Яңғыҙлыҡ исемдәр тик берәү генә була, улар ҙур хәрефтән яҙыла. Ә уртаҡлыҡ исемдәр күп. Сағыштырып ҡара: Өфө, ҡала, Миәкә, район, Марат, исем, Ағиҙел, йылға.

**3.** Тексты уҡы. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе тап.

### Әкиәт уҡыйым

Күп уҡыған — күп белер. Мин шул тиклем уҡырға яратам. Яңыраҡ Роза Хөснөтдинованың «Һауа шарының Европа буйлап сәйәхәте» китабын уҡыным. Китап рус телендә, 222 биттән тора. Эсендә мажараларға бай, ҡыҙыҡлы 36 әкиәт! Бындағы ваҡиғалар мине Лондон, Берлин, Мадрид, Париж, Рим ҡалаларына алып барҙы. Әкиәттәрҙең иң оҡшағандары «Өс тылсымлы сәтләүек», «Ашнаҡсы улы», «Сихырсы Рабиға һәм өләсәй», «Ҡыҙыҡай һәм сфинкс» булды.

Китапты бер аҙна эсендә уҡып бөттөм. Унда һәр әкиәт изгелеккә өйрәтә.

(«Йәншишмә» газетаһынан)

Т **4.** Һинең яратҡан әкиәтең бармы? Төркөмдә һөйләшеп алығыҙ.

**5.** Һин был китаптарҙы уҡынығмы?

Таңсулпан Ғарипова «Сыҫҡансыҡ менән Сыҫҡансуҡ мажаралары»

Гүзәл Ситдиҡова «Ҡолонсаҡ — арғымаҡ булыр бер саҡ»

Гөлсинә Йосопова «Һөйләшә белгән кәнфит»

Зөлфиә Кускилдина «Ҡуян баҙарҙа нисек бүре һатҡан»

**ҡыҙыҡлы** — интересный (-ая, -ое)
**изгелек** — добро

**бала саҡ** — детство
**әкиәт** — сказка

## 6 Мәктәптәге дуҫтарым менән таныштырайыммы? Исем

**А** **1.** Шиғырҙы тыңла.

Танышайыҡ, әйҙә, дуҫтар:
Минең исемем Ғәлим.
Күп китаптар уҡый-уҡый
Мотлаҡ булырмын ғалим!

(Нияз Сәлимов)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| тырыш | ялҡау | батыр |

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| көслө | ярҙамсыл | аҡыллы |

! Башҡорт телендә **исемдәр берлектә** (в ед. числе) һәм **күплектә** (во мн. числе) була: китап — китап**тар**, ручка — ручка**лар**. Сағыштыр: книг**а** — книг**и**, ручк**а** — ручк**и**.

**3.** Уҡы, оҡшаш текст төҙө.

## Минең дуҫым

Уҡытыусы «Минең дуҫым» темаһына текст төҙөргә ҡушты. Әминә Полина тураһында яҙҙы.

«Минең иң яҡын дуҫым — Полина. Ул бик аҡыллы, күп уҡый. Уның менән төрлө темаларға һөйләшеп була. Беҙ Полина менән бергә дәрес әҙерләйбеҙ. Мин уға математиканан ярҙам итәм, ә ул миңә — рус теленән. Полина — тырыш, ярҙамсыл дуҫ».

### Это интересно

Международный день дружбы отмечается 30 июля каждого года. Впервые его праздновали в 2011 году.

http://re-actor.net/he-and-she

**ғалим** — учёный
**аҡыллы** — умный (-ая, -ое)
**ялҡау** — ленивый (-ая, -ое)
**көслө** — сильный (-ая, -ое)
**батыр** — храбрый (-ая, -ое)

**мотлаҡ** — обязательно
**ҡушты** — велел (-а)
**ярҙам итәм** — помогаю

## 7 Беҙ мәктәптә нимә тураһында һөйләшәбеҙ?
## Исем

A **1.** Шиғырҙы тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Ағайымды бик яратам,
Тип маҡтана Көнһылыу,
Өйгә эште эшләп бирә,
Миңә ҡала күсереү.
Иртәгеһен «бишле» алам
Бөтә булған фәндәрҙән,

Уҡытыусы белмәй бит ул
Күсергәнде кемдәрҙән.
Ағаһы әйтә: «Был «бишле»
Минеке бит, минеке!»
Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ:
Был «бишле»ләр кемдеке?

(«Аҡбуҙат» журналынан)

1. Көнһылыу нисек уҡый?
2. Ҡыҙ ағаһын ни өсөн ярата?
3. Нисек уйлайһың, «бишле»ләр кемдеке?

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.


уйындар тураһында


кино тураһында

яңы аралашыу саралары тураһында

П **3.** Бирелгән ситуацияларға диалогтар төҙөгөҙ.

1) Иптәшегеҙгә яңы телефон бүләк иткәндәр;
2) компьютерҙа ҡыҙыҡлы уйын бар;
3) кинотеатрҙа шәп фильм күрһәтәләр.

Т **4.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

## Компьютерҙа эшләү ҡағиҙәләре

Тыуған көнөмә компьютер бүләк иттеләр! Хыялым тормошҡа ашты, минең дә шәп компьютерым булды. Хәҙер рәхәтләнеп уйнайым, ҡыҙыҡлы кинолар ҡарайым, дуҫтарым менән һөйләшәм, Интернетта соҡонам. Тик көнө буйы компьютер артында ултырырға ярамай. Түбәндәге ҡағиҙәләрҙе үтәү мотлаҡ:

1) компьютер артында төҙ ултырырға;
2) 20 минут һайын күҙҙәр өсөн гимнастика эшләргә;
3) компьютер артында ултырғанда махсус күҙлек кейергә;
4) ашағанда компьютерҙа эшләмәҫкә;
5) ауырыған ваҡытта компьютер артына ултырмаҫҡа;
6) компьютерҙа көнөнә бер сәғәттән артыҡ эшләмәҫкә.

Ошо ҡағиҙәләрҙе үтәгәндә генә һаулыҡҡа зыян килмәй. Мин был ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәргә тырышам. «Һаулыҡ — ҙур байлыҡ», — ти өләсәйем.

(«Мәктәп календары»нан)

1. Һин компьютер артында күпме ваҡыт үткәрәһең?
2. Ни өсөн компьютерҙа оҙаҡ эшләргә ярамай?

**минең, минеке** — мой (моя, моё)
**һинең, һинеке** — твой (твоя, твоё)
**уның, уныҡы** — его (её)

**маҡтана** — хвастается
**күсереү** — переписать
**зыян** — вред
**махсус** — специальный (-ая, -ое)
**ҡағиҙә** — правило

## 8 Беҙ мәктәптә нимә тураһында һөйләшәбеҙ?

## Исем

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Тейеш баһа

Тарих дәресенә әйҙәп,
Ҡыңғырау шылтыраны,
Шул саҡ класташым Азат
Ҡурҡыуҙан ҡалтыраны.
Сөнки ул бит уҡымаған
Өйгә бирелгән эште,
Дәрес башланыу менән
Уҡырға сат йәбеште.

Күп уҡырға өлгөрмәне —
Уҡытыусы саҡыртты,
Өйгә бирелгән эште
Һөйләп бирергә ҡушты.
Уҡымағас, ни һөйләһен,
Аптырап ҡарап ҡатты.
Үҙ өлөшөнә тейешле
Билдәһен алып ҡайтты.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

1. Ни өсөн Азат тарих дәресенән ҡурҡҡан?
2. Малай ниндәй билдә алып ҡайтҡан?

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, дауам итегеҙ.

— Бөгөн мин өс «5», ике «4» алдым!
— Ә мин математиканан ике «5» алдым!
— Алдашма!
— Ысын! Береһе контроль эштән, икенсеһе дәрестәге яуап өсөн.
— Ә мин минутына 140 һүҙ уҡыйым!
— Ә мин...

Т **3.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

## Телевизор ҡоло

Мине мәктәпкә дәрес ҡарарға саҡырҙылар. Башҡорт теле дәресе бара. Бөтә класс уҡытыусыға ҡарап тыңлап ултыра. Ҡапыл ҡыҙҙар, малайҙар көлә башланы. Булат исемле малай йоҡлап ултыра икән. Уҡытыусы: «Булат, йоҡонан уян!» — тип уятты.

Малай һикереп торҙо ла: «Әсәй, мин хәҙер фашистарҙы атып бөтөрәм!» — тип ҡысҡырҙы. Бөтәһе лә көлөп ебәрҙе.

Булат, класта икәнлеген күргәс, ҡып-ҡыҙыл булды.

Был малай мәктәптән ҡайтҡас, тиҙ генә өйгә эштәрен эшләй ҙә телевизорға «йәбешә», аҙаҡ компьютерға. Бөтә буш ваҡытын телевизор, планшет, компьютер ашай икән. Шуға күрә гел йоҡоһо килә.

Компьютер уйындарын күп уйнау, оҙаҡ телевизор ҡарау кешене арыта, хәлен ала шул. Шуға күрә Булаттың гел йоҡоһо килә. Булат кеүек уңайһыҙ хәлгә ҡалмаҫ өсөн, компьютерҙы, телевизорҙы ваҡытында һүндерергә кәрәк.

(Зөлфиә Кускилдинанан)

1. Текст ни өсөн «Телевизор ҡоло» тип атала?
2. Һеҙ планшет, компьютерҙа күпме ваҡыт ултыраһығыҙ?
3. Һеҙҙең класта ниндәй ҡыҙыҡлы хәлдәр булғаны бар?

**4.** Тексҡа таянып, хаталарҙы төҙәт.

1. Инглиз теле дәресе бара ине.
2. Ҡапыл уҡытыусы, ҡыҙҙар көлә башланы.
3. Булат исемле малай ашап ултыра икән.
4. Бөтә буш ваҡытын китап уҡып үткәрә.

**бөтәһе лә көлөп ебәрҙе** — все засмеялись

**телевизор ҡоло** — раб телевизора
**ҡалтыраны** — задрожал
**уҡырға сат йәбеште** (фраз.) — принялся усердно читать
**аптырап ҡарап ҡатты** (фраз.) — застыл от удивления
**ҡып-ҡыҙыл булды** — покраснел

Это интересно

В Австралии, в городе Сидней, есть школа для попугаев. Их там учат разговаривать, рассказывать стихи. А в Таиланде есть школа для слонов. Их учат рисовать, убирать улицу. Также проводят уроки актёрского мастерства. Будущие артисты должны будут развлекать туристов.

## Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау

**1.** Һәр юлда артыҡ һүҙҙе тап:

а) мәктәп, аҡбур, таҡта, тәнәфес, икмәк
б) уҡытыусы, салбар, китап, дәрес, ҡәләм
в) дәфтәр, ручка, парта, танау, пенал
г) юйғыс, күндәлек, ҡыңғырау, ҡолаҡ, уҡыусы

**2. Мин башҡорт теле дәресен яратам** һөйләменең дөрөҫ тәржемәһен тап:

а) Я люблю урок русского языка.
б) Я люблю урок английского языка.
в) Я люблю урок башкирского языка.
г) Я не люблю урок башкирского языка.

**3.** Һәр юлда **кем?** һорауына яуап биргән һүҙҙе тап:

а) малай, китап, ҡәләм, портфель, ручка
б) дәрес, уҡыусы, мәктәп, юйғыс, журнал
в) класташ, линейка, аҡбур, таҡта, бүлмә
г) дуҫлыҡ, һуғыш, хеҙмәт, мажара, дуҫ

**4. Это мой ноутбук** һөйләменең дөрөҫ тәржемәһен тап:
а) Был ноутбук уныҡы.
б) Был ноутбук минеке.
в) Был һинең ноутбук.
г) Был беҙҙең ноутбук.

**5.** Һәр юлда яңғыҙлыҡ исемдәрҙе тап:

а) өфө, ҡала, сәскә, аҡбур, рәсем
б) бутҡа, айнур, күндәлек, ҡәләм, изгелек
в) ағай, мажара, дуҫлыҡ, мостай кәрим, китап
г) ғарипов, уҡыусы, уҡытыусы, дуҫлыҡ, бүлмә

9

# Телмәр үҫтереү

## Исем









## 10 Беҙгә бергәләп күңелле
## Сифат

**1.** Һүҙҙәрҙе уҡы, тәржемәләрен хәтереңә төшөр.

атай, әсәй, олатай, өләсәй, ҡартатай (ҡартай), ҡартәсәй (ҡәрсәй), инәй, бабай, ағай, еңгәй, апай, һеңле, ҡусты, ейән, ейәнсәр, туған, бүлә, бүләсәр

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Әминә туғаным, көҙгө урман һүрәтен төшөр әле.
— Ә нимә төшөрәйем?
— Ҡояш, бәшмәк, ағас.
— Ағай, ағас һүрәтен төшөрөүе ҡыйын.
— Ҡоштар китеүен төшөрә алаһыңмы?
— Ярай, мин һүрәт төшөрәм, ә һин миңә рус теленән өйгә эште эшләргә ярҙамлашырһың.
— Ярай. Рәхәт икән туғаның булғанда.

!

**Сифат** (имя прилагательное) предметтың төҫөн, тәмен, ҙурлығын, нимәнән эшләнгәнен белдерә. **Ниндәй?** (какой? какая? какое? какие?) һорауына яуап бирә. Исем алдында килә. Мәҫәлән: **зәңгәр** шар, **әсе** һуған, **бәләкәй** туп, **ағас** өҫтәл. Сағыштыр: **зәңгәр** шар — **голубой** шар, **бәләкәй** туп — **маленький** мяч.

Башҡорт телендә сифаттар күплектә булмай: **яҡшы** малай — **яҡшы** малайҙар. Сағыштыр: **хороший** мальчик — **хорошие** мальчики.

**3.** Тексты уҡы.

## Минең атайым

Минең атайымдың исеме Айҙар. Ул 1980 йылда Михайловка ауылында тыуған. Уға 36 йәш. Мәктәптә тырышып уҡыған. Өйҙә әсәһенә ярҙамсы булған, ике бәләкәй ҡустыһын ҡарашҡан. Мәктәптән һуң, атайым Стәрлетамаҡ техникумын тамамлаған. Армияла Чечен Республикаһында хеҙмәт иткән.

Әле атайым Себерҙә эшләп йөрөй. Беҙ уны бик һағынабыҙ. Ул бик уңған, ярҙамсыл. Ял көндәрендә беҙ футбол, волейбол уйнарға, тәбиғәткә сығырға яратабыҙ. Бергәләп балыҡҡа йөрөйбөҙ, төрлө уйындар уйнайбыҙ. Мин атайымды яратам.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

Атайың тураһында нимәләр беләһең? Тексҡа оҡшатып һөйлә.

### Это интересно

В России живёт самая большая семья в мире, которая занесена в Книгу рекордов Гиннесса, — семья Шишкиных из Воронежской области. У Александра и Елены 20 родных детей: 9 сыновей и 11 дочерей.

http://www.uznayvse.ru/ samyie-mnogodetnyie-semi-v-mire

**туған** — 1. родственник;
2. брат или сестра
**ял көндәре** — выходные дни

**ҡоштар китеүе** — отлёт птиц
**хеҙмәт иткән** — служил
**һағынабыҙ** — скучаем

# 11 Мин — тәрбиәле бала
## Сифат

А **1.** Тексты тыңла.

Мәктәптә лә, йортонда ла
Ғәли һәр саҡ маймыллана,
Һәм үҙенең был ғәҙәтен
Япһара ул маймылдарға:
— Маймылдар бит улар беҙҙең
Йыраҡ ата-бабалар, — ти. —
Был турала китаптарҙа
Бәйнә-бәйнә яҙалар, — ти.
— Һиңә ҡойроҡ етмәй, — тиһәң,
Күрһәтә ул көндәлеген.
Ҡойроҡло «икеле»не
Эләктергән көн дә берҙе.
— Ғалимдар, — ти, — шундай ҡыҙыҡ,
Һаман шуны төшөнмәгән:
Кеше тыуған маймылдарҙан,
Ә маймылдар — кешеләрҙән.

(Ринат Хәйри)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

**итәғәтле**

**әҙәпле**

**тәрбиәле**



**3.** Шиғырҙы уҡы, һорауҙарға яуап бир.

## Ежели вы вежливы

Ежели вы вежливы
И к совести не глухи,
Вы место без протеста
Уступите старухе.
Ежели вы вежливы
В душе, а не для виду,
В троллейбус
Вы поможете
Взобраться инвалиду.

Ежели вы вежливы,
То, сидя на уроке,
Не будете с товарищем
Трещать, как две сороки.
И ежели вы вежливы,
То в разговоре с тётей,
И с дедушкой,
И с бабушкой
Вы их не перебьёте...

(Самуил Маршак)

1. Һин тормошта кемгә ярҙам иткәнең бар?
2. Транспортта үҙеңде нисек тотаһың?

Т **4.** Тексты уҡығыҙ. Тағы нимә өҫтәргә мөмкин? Төркөмдә һөйләшеү ҡороғоҙ.

Тәрбиәле бала

— ололарға урын бирә,
— ата-әсәһен тыңлай,
— матур һөйләшә,
— кейемен таҙа тота,
— бәләкәй балаларҙы рәнйетмәй,
— дәрестә уйнап ултырмай,
— урамда сүп ташламай,
— алдашмай,
— ... .

### Это интересно

Вежливость, как форма проявления уважения, происходит от древнерусского слова «вежа» — знающий, сведущий. Отсюда вежливый — знающий, как себя вести. Вежливость выражается посредством учтивого поведения. Истинная вежливость подразумевает наличие доброжелательного отношения к человеку.

**итәғәтле** — вежливый (-ая, -ое)
**әҙәпле** — порядочный (-ая, -ое)
**тәрбиәле** — воспитанный (-ая, -ое)

**урын бирә** — уступает место
**ата-әсәһен тыңлай** — слушается родителей
**төшөнмәгән** — (зд.) не поняли
**рәнйетмәй** — не обижает
**маймыл** — обезьяна

## 12 Мин — тәрбиәле бала
## Сифат

А **1.** Тексты тыңла.

### Нимә ул яҡшы, нимә ул насар?

Бәләкәй улы атаһына
Шундай һорау бирҙе:
— Атай, нимә ул яҡшы,
Нимә ул насар? — тине.
— Берәүҙең ҡулы бысраҡ,
Бите-башы ҡоромло,
Бынықы инде бик насар,
Тип әйтһәк тә урынлы.

Бер бала һабын ярата,
Көн дә тешен таҙарта.
Бына был бала яҡшы —
Уны һәр кем ярата.
Был малай тырыш,
эш һөйә,
Китапҡа күңел һала.
Ундайҙарҙы бик маҡтайҙар...

Ул быға лайыҡ бала...
Бының ингән бысраҡҡа,
Үҙе шуға шатлана.

Ундайҙарҙы яратмайҙар:
Ул насар, шаҡшы бала.

(Владимир Маяковскийҙан)

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Айрат, һинең алдашҡаның бармы?
— Юҡ. Ә ниңә һорайһың?
— Әсәйемә контроль эштән алған «икеле» тураһында әйтергәме-юҡмы, шуны уйлайым.
— Әйтергә кәрәк, «икеле»ң электрон көндәлектә күренеп тора. Алдашыу — насар ғәҙәт.
— Нимә эшләргә һуң?
— Әйҙә, мин һиңә үткән теманы аңлатам, иртәгә уҡытыусыға яуап бирерһең.
— Бына бының шәп! Рәхмәт!

**3.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

## Өс һәйкәл

Һиндостанда өс маймыл һәйкәле бар. Бер маймыл — күҙҙәрен, икенсе маймыл — ҡолаҡтарын, өсөнсө маймыл ауыҙын ҡулдары менән ҡаплаған. Күҙҙәрен ҡаплаған маймыл кешенең насар яҡтарын күрмәҫкә, ҡолаҡтарын ҡаплағаны юҡ-барҙы тыңламаҫҡа, ә өсөнсөһө күп һөйләргә, алдашырға ярамағанлыҡты белдерә икән.

(«Мәктәп календары»нан)

1. Кешеләрҙә ниндәй насар сифаттар осрай?
2. Түбәндәге мәҡәлдәрҙән тексҡа тура килгәнен һайла:

Уйламай һөйләгән — ауырымай үлгән.
Әйткән һүҙ — атҡан уҡ.

### Это интересно

В Японии на стоянках для велосипедов, находящихся рядом со школами, можно увидеть две таблички. На одной изображены несколько аккуратно стоящих велосипедов и надпись: «Так ставят велосипеды хорошие дети». На другой табличке можно увидеть пару небрежно брошенных велосипедов и другую надпись. Думаешь какую? «Так хорошие дети велосипеды не ставят».

**тешен таҙарта** — чистит зубы
**күҙҙәрен ҡаплаған** — прикрыла глаза
**алдашырға ярамай** — нельзя обманывать
**насар ғәҙәт** — плохая привычка

**һәйкәл** — памятник
**ҡоромло** — в саже
**юҡ-барҙы тыңламаҫҡа** — не слушать чепуху
**китапҡа күңел һала** — любит книгу
**күп һөйләргә ярамай** — нельзя много болтать

## 13 Минең өйҙәге бурыстарым
## Сифат

**А** **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Ул да әсәһенә булышҡан

Йыйылғандар ҙа балалар
Һөйләшәләр үҙ-ара.
Әсәйҙәргә ярҙам итеү
Тураһында һүҙ бара.

Берәү әйтә кер йыуғанын,
Берәү — һыуға барғанын,
Берәү — иҙән һепергәнен,
Берәү — утын ярғанын.

Һүҙгә ҡушылмайса тора
Тик бер Сания ғына.
Уның бер ни өндәшмәүен
Һиҙеп ҡалдылар бына.
— Ә һин бөгөн ни эшләнең?
Әйт, торма улай мыштым.

— Мин ни... кейендерешергә
Әсәйемә булыштым.
Дуҫ ҡыҙҙары шаулаштылар:
— Асыҡлап әйт һүҙеңде,
Кемде кейендерештең һуң?
— Кемде булһын, үҙемде!

(Марат Кәримов)

1. Балалар өйҙә нимәләр эшләгән?
2. Сания кемгә ярҙам иткән?

П **2.** Тексты уҡығыҙ, диалогты сәхнәләштерегеҙ.

## Дүрт ҡыҙыҡай

Дүрт ҡыҙыҡай менән урам буйлап әсәй килә.
— Үҙемә **ҙур** сумка алам, — ти әсәй.
— Тағы ла **бәләкәй** дүрт сумка, — ти дүрт ҡыҙыҡай ҙа.
— **Ҙур** тараҡ һатып алам, — ти әсәй.
— Беҙгә лә **бәләкәй** дүрт тараҡ, — ти дүрт ҡыҙыҡай ҙа.
— Үҙемә **ҙур** яулыҡ һатып алам, — ти әсәй.
— Беҙгә лә дүрт **бәләкәй** яулыҡ, — ти дүрт ҡыҙыҡай ҙа.
— Иҙән йыуырға щётка алам, — ти әсәй.
Дүрт ҡыҙыҡай бер ни ҙә өндәшмәй.

(Дмитрий Лукичтан)

1. Һеҙгә ҡыҙҙар оҡшаймы? Улар әсәһен яратамы?
2. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәр нимәне белдерә?
3. Өйҙә әсәйгә нисек ярҙам итеп була?
4. Диалогты үҙгәртеп ҡарағыҙ.

! Сифаттар ҡапма-ҡаршы мәғәнәне аңлата алалар. Уларҙы **антоним** тип атайҙар. Мәҫәлән: **ҙур** яулыҡ — **бәләкәй** яулыҡ, **таҙа** ҡул — **бысраҡ** ҡул, **яҡшы** уҡыусы — **насар** уҡыусы.

Т **3.** Һеҙ өйҙә ошо эштәрҙе эшләйһегеҙме? Тағы нимә өҫтәргә мөмкин? Төркөмдә һөйләшеп алығыҙ.

1. Ишек төбөндәге балаҫты ҡағам.
2. Гөлдәргә һыу һибәм.
3. Сумкалағы аҙыҡ-түлекте өҫтәлгә ҡуйышам.
4. Ишек төбөндәге аяҡ кейемдәрен алып ҡуям.
5. Иҙәнде һеперәм.
6. Кейемдәремде йыйып ҡуям.
7. Китап-дәфтәрҙәремде бер урында тотам.
8. Бесәйҙе ашатам.
9. Носкиҙарымды йыуам.
10. ...

**4.** Мәҡәлде уҡы, мәғәнәһен аңлат.

Тырышлыҡ — ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ — хурлыҡ.

**кер йыуыу** — стирать бельё
**утын ярыу** — колоть дрова
**һыуға барыу** — пойти за водой
**иҙән һепереү** — подметать пол
**аяҡ кейемдәрен алыу** — убирать обувь

**мыштым** — (зд.) тихо
**һиҙеп ҡалдылар** — заметили
**үҙемә** — себе
**бер ни өндәшмәйҙәр** — ничего не говорят (молчат)
**хурлыҡ** — позор
**балаҫ** — (зд.) коврик

## 14 Минең яраткан шөғөлөм
## Сифат

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Минең шөғөлөм

Футбол — яҡшы спорт уйыны,
Ярата һәр бер малай,
Туп тибеп тә ҡарамай
Түҙеп тораһың ҡалай?

Волейбол да яҡшы уйын,
Тик футбол миңә кәрәк.
Аршавин кеүек футболсы
Булыу минең ҙур теләк.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

1. Малай кем булырға теләй?
2. Һинең яраткан шөғөлөң бармы?

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Катя, бөгөн беҙгә кил, мин һиңә үҙем сиккән картинаны күрһәтәм.
— Һин сигә беләһеңме? Ә нимә менән сигәһең?
— Төрлө төҫлө ептәр һәм ялтырауыҡ таштар менән.
— Бик шәп шөғөл. Ә кем өйрәтте?
— Апайым. Теләһәң, һине лә өйрәтермен.
— Ярай. Дәрестән һуң осрашырбыҙ.

! Сифаттар төрлө дәрәжәлә була: төп, сағыштырыу, аҙһытыу, артыҡлыҡ. Мәҫәлән: **яҡшы** уйын, яҡшы**раҡ** уйын, **ныҡ** яҡшы уйын.

Төҫтө, тәмде белдергән сифаттар ғына аҙһытыу дәрәжәһе менән үҙгәрә: йәшел еп — йәш**келт** еп, әсе һыған — әс**келт** һыған.

**3.** Тексты уҡы. Үҙең аңлағанса һөйлә.

## Шахмат уйнау — шәп шөғөл!



Минең яратҡан шөғөлөм — шахмат уйнау. Шахмат уйнарға атайым өйрәтте. Уны Һиндостанда уйлап тапҡандар. Был уйынды балалар ҙа, ололар ҙа яратып уйнай. Хатта компьютерҙар ҙа шахмат уйнай ала. Был ысын спорт төрө. Шахматта иң мөһиме — аҡыл көсө.

Шахматта һәр уйынсының үҙ армияһы бар: 8 пешкаһы, 2 аты, 2 филе, 2 ладьяһы һәм ферзе. Иң төп фигура — король. Ҡалған бөтә фигуралар ҙа уны һаҡларға тейеш. Әгәр королгә һөжүм итһәләр һәм уны ашарға янаһалар, «шах» тип әйтеләә. Ә уға ҡасырға мөмкинлек булмаһа — мат ҡуялар. Уйында кем королгә мат ҡуя, шул еңеүсе була.

Мин мәктәптә шахмат ярышында беренсе урын алдым. Хәҙер дуҫтарымды уйнарға өйрәтәм.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

### Это интересно

Уолт Дисней любил поезда до такой степени, что ни один из Диснейлендов не обходился без игрушечной железной дороги, а в его офисе была установлена огромная модель паровоза. Вокруг дома Диснея была построена копия железной дороги с мостом, развилками и движущимися составами, на которых хозяин с удовольствием катал своих гостей.

**сигеү** — вышивание
**шәп шөғөл** — замечательное занятие
**шахмат уйнау** — играть в шахматы
**еңеүсе** — победитель

**ялтырауыҡ таштар** — стразы
**өйрәтермен** — научу
**төҫлө ептәр, мулинә** — мулине
**шахмат ярышы** — соревнование по шахматам

## 15 Минең яратҡан шөғөлөм
## Сифат

**А** **1.** Тексты тыңла.

Һәр кешенең яратҡан шөғөлө була. Минең яратҡан шөғөлөм — самолёт моделе төҙөү. Мин авиамоделистар түңәрәгенә йөрөйөм. Беҙ унда төрлө материалдан самолёт моделдәре яһайбыҙ. Һуңынан осороп ҡарайбыҙ. Самолётың йыраҡ осһон өсөн ныҡ тырышырға кәрәк. Был түңәрәккә йөрөүселәр күп. Үҫкәс, мин үҙемә ысын самолёт яһап алам.



**П** **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Булат, дәрестән һуң нимә эшләйһең?
— Музыка мәктәбенә барам. Бөгөн сольфеджио.
— Кискә беҙгә кил, үҙемдең ручкалар коллекцияһын күрһәтәм.
— Ручкалар коллекцияһын? Шәп! Күптән йыяһыңмы?
— 2 йыл. Коллекциямда 45 ручка булды.
— Оһо! Ярай, килермен. Бик ҡыҙыҡ.

! Сифаттар һөйләмде матурлап тора, улар предметтарға аныҡлыҡ бирә. Сағыштырығыҙ: Минең коллекциям бар. Минең **шәп** коллекциям бар.

**3.** Тексты уҡы. Үҙең аңлағанса һөйлә.

## Хобби

Һәр кешенең үҙе яратып башҡарған эше була. Берәүҙәр йорт төҙөй, машина, троллейбус, поезд йөрөтә. Икенселәр почтала, дауаханала, магазинда, заводта эшләй. Балаларҙың да эше бар — мәктәптә уҡыу.

Төп эшенән буш ваҡытында кеше башҡа бер шөғөл менән мауыға. Уны «хобби» тиҙәр. Берәү спорт менән шөғөлләнә. Кемдер гөлдәр үҫтерә. Икенселәр аквариумда балыҡтар аҫрай. Төрлө марка, открыткалар йыйыусылар ҙа бар.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

### Это интересно

Жительница Германии Ангелика Унфергау собрала 168 700 шариковых ручек. Все ручки привезены из 137 стран мира. Самая дорогая ручка в коллекции выполнена из платины и золота, а её стоимость доходит до 500 долларов США.

http://mirfaktov.net

**мауыға** — увлекается
**буш ваҡыт** — свободное время
**йыя** — собирает

**төрлө материалдан** — из разного материала
**осороп ҡарайбыҙ** — испытываем в полёте

## 16 Мин йәшәгән бүлмә
## Сифат

**А** **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Әйберҙәрем тыңламай!

Минең исемем Андрей. Был минең бүлмәм. Минең әйберҙәрем мине тыңламай. Бүлмәлә тәртип юҡ. Бөтә ерҙә уйынсыҡтар һәм кейемдәрем туҙҙырылған. Бына бейәләйем, тегендә футболкам. Диванда курткам ята. Бер носкийым ултырғыс аҫтында, икенсеһе портфелемдә. Салбарым өҫтәл өҫтөндә. Уйынсыҡтарым ҡайҙа һуң? Улар өҫтәл аҫтында.

1. Андрей тәртипле малаймы?
2. Һеҙҙең әйберҙәрегеҙ ҡайҙа ята?

**П** **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Һорауҙарын ҡалдырып, яуаптарын үҙгәртегеҙ.

— Алина, һин ҡайһы урамда йәшәйһең?
— Мостай Кәрим урамында. Ә һин?
— Беҙҙең өй Зәки Вәлиди урамында. Фатирыбыҙ яңы йортта, унынсы ҡатта.
— Беҙҙең фатир дүртенсе ҡатта, өс бүлмәле.
— Үҙеңдең бүлмәң бармы?
— Эйе, апайым менән икебеҙҙең бүлмә.

**3.** Тексты уҡы. Үҙең аңлағанса һөйлә.

### Минең бүлмәм

Минең бүлмәм — фатирҙағы иң яҡты бүлмә. Унда түңәрәк яҙыу өҫтәле, уңайлы ултырғыс, компьютер, күн

диван, ике китап кәштәһе һәм кейем шкафы бар. Мин бүлмәмде тәртиптә тоторға тырышам. Шулай ҙа һәр саҡ таҙа тота алмайым. Минең бүлмәмдә күп нәмә табырға мөмкин: төрлө китаптар, дәфтәрҙәр, ҡыҙыҡ уйынсыҡтар, журналдар. Мөйөштәге кәштәлә мин яратҡан керамик фигуралар коллекцияһы бар. Бына шундай минең бүлмәм!

**уңайлы** — удобный (-ая, -ое)
**күн** — кожаный (-ая, -ое)
**мөйөш** — угол
**кәштә** — полка
**тәртип** — порядок

**тыңламай** — не слушаются
**таҙа тота алмайым** — не могу содержать в чистоте
**түңәрәк өҫтәл** — круглый стол

## 17 Минең кескәй дуҫтарым
## Сифат

А **1.** Тексты тыңла.



Минең кескәй дуҫым бар. Кем икәнен белгегеҙ киләме? Ул ташбаҡа. Кескәй генә ташбаҡаны әсәйем менән зоомагазиндан алып ҡайттыҡ. Уға үлән дә һатып алдыҡ. Өйҙә мин уны йылы террариумға ебәрҙем. Бәләкәй ташбаҡаға тәмле алма, кишер ваҡлап бирҙем. Ул бананды яратып ашаны. Кис көнө ташбаҡа өйөнә инеп йоҡланы.

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Андрей, минең этемде күргең киләме?
— Эйе. Ә ҡушаматы нисек?
— Полкан. Ул немец овчарkahы.
— Oho! Ә ул мине тешләмәҫме?
— Юҡ. Ул бик аҡыллы эт. Килгәс күрерһең.

**3.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

## Төлкөгә ҡойроҡ ниңә кәрәк?

Ҡыш көнө төлкө ҡар өҫтөндә йоҡлай һәм танауын ҡойроғо менән ҡаплай. Ҡойроҡ төлкөгә йылы юрған булып тора. Шуға күрә ул ҡышҡы һыуыҡта өшөмәй.



Ҡойроҡ төлкөгә ҡурҡыныс янағанда кәрәк. Эттәрҙән ҡасып барғанда төлкө ҡойроғон ситкә ала һәм ҡапыл боролоп китә. Эт ҡапыл борола алмай, сабып үтеп китә.



Төлкөнөң ҡойроҡ осо ғына аҡ. Ул аҡ флаг кеүек алыҫтан күренә. Төлкө балалары әсәһенең ҡойроҡ осон йәшел үлән араһында күреп торалар һәм юғалмайҙар.



1. Ҡойроҡ төлкөгә нисек ярҙам итә?
2. Һин төлкө тураһында ниндәй әкиәт беләһең?

### Это интересно

1. Змеи могут спать 3 года подряд без еды.
2. Дельфины спят с одним открытым глазом.
3. Крот за ночь может прорыть туннель длиной 76 метров.
4. Крокодилы глотают камни, чтобы нырнуть глубже.
5. Сердце кита бьётся только 9 раз за минуту.
6. Синица кормит своих детёнышей в сутки 1000 раз.
7. Длина языка жирафа достигает 50 см.

**ташбаҡа** — черепаха
**алйырҙан** — хомяк
**ҡусҡар** — улитка
**ҡар өҫтөндә** — на снегу
**ҡышҡы һыуыҡ** — зимний мороз

**ҡойроҡ осо** — кончик хвоста
**йылы юрған** — тёплое одеяло
**ҡапыл борола** — резко поворачивается
**ҡойроҡ алыҫтан күренә** — хвост виден издалека
**юғалмайҙар** — не теряются

**4.** Бирелгән һүҙҙәрҙән һүҙбәйләнештәр төҙө.

**Өлгө:** йомшаҡ бесәй.

| **Нимә?** | **Ниндәй?** |
|---|---|
| ташбаҡа | йомшаҡ |
| бесәй | матур |
| тутыйғош | бәләкәй |
| эт | ҡыҙыҡ |
| алйырҙан | уҫал |
| ҡусҡар | аҡыллы |

## 18 Мин йәшәгән Ер
### Алмаш

А **1.** Тексты тыңла.

### Башҡортостан

Башҡортостан, һин беҙҙең
Тыуған, үҫкән илебеҙ.
Беҙгә икмәк, өй биргән,
Һыуын эскән еребеҙ.

(Гөлфиә Юнысова)

! **Алмаш** (местоимение) телмәрҙә төрлө һүҙ төркөмдәрен алмаштыра ала. Мәҫәлән: **Артур** минең дуҫым. **Ул** (Артур) яҡшы уҡый. Артур **һәйбәт** дуҫ. **Шундай** (һәйбәт) дуҫым булыуына шатмын.

**2.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

### Рәсәй иле

Рәсәй — майҙаны буйынса донъялағы иң ҙур ил. Уның көнбайыштан көнсығышҡа тиклемге оҙонлоғо 10 мең километр самаһы, төньяҡтан көньяҡҡа тиклемге ара 4 мең километр. Рәсәйҙең көнбайыштағы күршеләре Эстония, Латвия, Литва, Польша, Белоруссия, Украина булһа, төньяҡ-көнбайышта ул Норвегия, Финляндия менән сиктәш. Көньяҡта Грузия, Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Монголия,

Ҡытай һәм Төньяҡ Корея илдәре менән сикләнә. Япония һәм Америка Ҡушма Штаттары Рәсәйҙән диңгеҙ сиктәре менән бүленгән.

1. Рәсәйҙең көнбайыштан көнсығышҡа тиклемге оҙонлоғо нисә километр?

2. Рәсәй ниндәй илдәр менән сиктәш?

3. Рәсәйҙең диңгеҙ сиктәре ниндәй илдәр менән бүленгән?

П **3.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, әңгәмә ҡороғоҙ.

— Диана, Ерҙең нисә юлдашы бар?

— Белмәйем. Үҙең әйт.

— Ерҙең бер юлдашы бар — Ай. Ул 28 көн эсендә Ерҙе урап сыға.

— Ә Ҡояш Ерҙең юлдашы түгелме?

— Юҡ. Ер үҙе Ҡояштың юлдашы. Тағы 7 планета Ҡояш тирәләй әйләнә: Меркурий, Венера, Марс, Юпитер, Сатурн, Уран, Нептун.

— Һин быны ҡайҙан беләһең?

— Күп уҡыһаң, күп белерһең.



### Это интересно

Солнце — это единственная звезда Солнечной системы, вокруг которой вращается наша планета и все планеты Солнечной системы. Оно в миллион раз больше Земли. Среднее расстояние от Земли до Солнца — 149,6 млн км. Световой луч доходит до Земли за 8 минут.

Светило Солнечной системы невероятно горячее. На его поверхности температура 6000 °С, а в центре — более 15 млн градусов.

**көнсығыш** — восток
**көнбайыш** — запад
**көньяҡ** — юг
**төньяҡ** — север
**майҙан** — площадь

**сиктәш булыу** — граничить
**диңгеҙ сиктәре** — морские границы
**урап сыға** — обходит
**юлдаш** — спутник
**әйләнә** — вращается

## 19 Мин йәшәгән йорт/район

## Алмаш

А **1.** Шиғырҙы тыңла.

Ватан ул, ҡыҙым, — Тыуған ил,
Бына беҙ торған урын.
Был ерҙә ғүмер кисергән
Атай-бабайҙар борон.

(Рәшит Ниғмәти)

М. Матусовскийҙың «С чего начинается Родина?» шиғыры менән сағыштыр.

П **2.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Һин ҡайҙа йәшәйһең?
Ҡайһы урамда тораһың?
Өйөгөҙ ҙурмы?
Фатирығыҙҙа нисә бүлмә?
Бүлмәләрҙә нимәләр бар?
Һинең бүлмәң links? Ул ниндәй?

! Башҡорт телендә **күрһәтеү алмаштары** (указательные местоимения) ике төркөмгә бүленә:

1) **был, ошо, бынау** — күҙ алдында торған предметтарҙы күрһәтеү өсөн: был ҡала, ошо бүлмә, бынау ауыл;

2) **теге, шул, анау, ул** — йыраҡ торған предметтарҙы күрһәтеү өсөн: анау йорт, теге урам, шул фатир.

**3.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

## Минең йортом

Һәр кеше өсөн үҙ йорто — ул бәләкәй генә үҙ донъяһы. Өй — тыныслыҡ һәм ышаныс, йылылыҡ символы. Өйҙә берәүгә лә ҡурҡыныс янамай, шуға күрә кеше өйҙә ял итә, тынысланa.

Тыуған йорт — ул беҙҙең бәләкәй генә тыуған илебеҙ, бында беҙ тыуғанбыҙ, үҫкәнбеҙ. Шул уҡ ваҡытта тыуған ил — ул бар халыҡ өсөн уртаҡ йорт.

«Тыуған йорт» төшөнсәһе һәр кеше өсөн изге. Уның тураһындағы уйҙар кешегә көс бирә. Кеше менән уның йорто араһында күҙгә күренмәгән тығыҙ бәйләнеш бар.

Шуға күрә тыуған йортобоҙҙо һағынабыҙ, уның тураһында хәстәрлек күрәбеҙ.

1. Нимә ул тыуған йорт?
2. Өй нимәнең символы?

**тыуған йорт** — родной дом
**үҙ донъяһы** — свой мир
**көс бирә** — придаёт силы
**уртаҡ йорт** — общий дом

**хәстәрлек күреү** — заботиться
**изге төшөнсә** — святое понятие
**тығыҙ бәйләнеш** — тесная связь
**ҡурҡыныс янамай** — опасность не угрожает

## 20 Минең күршеләрем
### Алмаш

А **1.** Тексты тыңла.

### Ватан

Ватан — һинең ата-әсәң,
Ватан — дуҫың, туғаның,
Ватан — өлкәң йә баш ҡалаң,
Ватан — район, ауылың.

(«Йәншишмә» газетаһынан)

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Сәләм, күрше! Ин әле беҙгә!
— Һаумы! Ни йомош?
— Һинең ярҙамың кәрәк ине.
— Нимә булды?
— Компьютерым эшләмәй.
— Хәҙер инәм.

! Әгәр һин башҡорт телендә берәй әйберҙең үҙеңдеке икәнен әйткең килһә, шулай әйт: **минең** телефоным — телефон **минеке.** Әйбер дуҫыңдыҡы булһа, шулай әйт: **һинең** телефоның — телефон **һинеке.** Һөйләшеүҙә өсөнсө кеше булһа, шулай әйт: **уның** телефоны — телефон **уныҡы.**

Т **3.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

## Ҡунаҡта

Мин ҡалала йәшәйем. Беҙҙең өйөбөҙ туғыҙ ҡатлы. Унда күп кешеләр йәшәй. Уларҙың исемдәрен дә белмәйем. Ә ауылда әллә күпме кешене беләм.

Минең олатайым ауылда тора. Йәй көнө мин унда ҡунаҡҡа барам. Ауылда Ирина исемле әхирәтем бар. Уның ҡустыһы Наил исемле. Уларҙың йорто беҙгә яҡын ғына. Шуға күрә йүгереп барам да етәм.

Күрше йортта Барый ағай менән Фатима еңгә йәшәй. Барый ағай комбайнда эшләй. Ул механизатор. Фатима еңгә мәктәптә балалар уҡыта. Айбулат — уларҙың улы. Уға 15 йәш. Ул олатайыма ярҙам итеп тора.

Беҙгә ҡаршы ғына Ғариф бабай менән Сабира инәй йәшәй. Уларға ейәне Ленар менән ейәнсәре Ынйы килә. Беҙ бергә уйнайбыҙ. Күршелә генә дуҫтарың булыуы рәхәт икән!

(«Йәншишмә» газетаһынан)

1. Һин күршеләреңде беләһеңме?
2. Күршең менән татыу йәшәү нисек була?

**күрше** — сосед
**ҡунаҡҡа** — в гости

**татыу йәшәү** — дружно жить
**каршы** — (зд.) напротив

## 21 Мин яратҡан урындар
## Алмаш

А **1.** Тексты тыңла.

Минең исемем Айрат. Фамилиям — Хәсәнов. Мин Дәүләкән ҡалаһында йәшәйем. Беҙҙең йорт ҡаланың ситендә тора. Мәктәп беҙҙең йорттан алыҫ ҡына.

Мин мәктәпкә күршем Алина менән барам. Беҙ бер класта уҡыйбыҙ. Класта ла бер парта артында ултырабыҙ. Мәктәптән ҡайтҡанда мин уның портфелен күтәрешәм. Дәрестәрҙе лә бергә әҙерләйбеҙ. Алина миңә башҡорт теленән ярҙам итә, ә мин уға тарихтан өйгә эште эшләшәм. Шундай яҡшы күршем булыуына шатмын.

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Айрат, һин ҡайҙа ял итергә ратаһың?

— Күл буйында. Унда балыҡ ҡармаҡлап, һыу инеп, кәмәлә йөрөп була. Ә һин?

— Мин тауҙарға үрмәләргә яратам. Быйыл Ирәмәлгә мендек.

— Ҡыйын булманымы?

— Юҡ, мин йыл буйы махсус секцияға йөрөнөм. Унда беҙ етеҙ үрмәләргә өйрәндек.

— Ҡыҙыҡ. Мине лә ал әле үҙең менән.

— Ярай. Шәмбе көн кил, бергәләп барырбыҙ.

Т **3.** Уҡығыҙ. Тексҡа оҡшатып, үҙегеҙ яратҡан урын тураһында һөйләргә өйрәнегеҙ.

Беҙҙең планета иҫ киткес матур. Матур урындар күп булһа ла, һәр кешенең яратҡан урыны була. Яратҡан урын үҙең йәшәгән йорт эргәһендә лә, бик алыҫта ла булыуы мөмкин.

Минең өсөн шундай урын — тыуған ауылым. Бында миңә бөтә нәмә таныш, күңелгә яҡын. Ә һеҙҙең яратҡан урынығыҙ бармы?

(«Йәншишмә» газетаһынан)

**4.** Интернеттан беҙҙең планетаның тылсымлы урындары тураһында мәғлүмәт тап.


Стоунхедж (Англия)


Сфинкс (Египет)


Моаи һәйкәлдәре (Пасха утрауы)

**яратҡан урын** — любимое место

**ҡала ситендә** — на окраине города
**етеҙ үрмәләргә** — быстро карабкаться
**таныш** — (зд.) знакомо

## 22 Беҙҙең урам/йорт балалары
## Алмаш

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Тау башында дүрт кеше ултыра.

Ыҫмала төҫлө ҡара ҡуйы сәсле, ҡылыс танаулы, сандыр малай Ғабдулла исемле. Йәмшек танаулы, табаҡ битле йыуаны — Вәзир, һыуыҡта ла, эҫелә лә уның ике бите гел ҡыҙарып янып тора. Вәзирҙең күҙҙәрен сылт-сылт йома торған ғәҙәте бар. Үҙе шундай булһа ла, рогатканан һәләк мәргән ата ул. Өсөнсөһө — Бөркөтлөлә берҙән-бер ерән сәсле, һипкелле малай Айҙар. Уның «Ҡыр кәзәһе» тигән ҡушаматы ла бар. Шәп йүгергән өсөн шулай тип йөрөтәләр. Дүртенсеһе саҡ ҡына ситтәрәк ултыра. Уның әле етеһе лә тулмаған. Сысҡан ҡойроғо кеүек кенә сәсенә матур ҡыҙыл таҫма ҡушып үргән. Исеме лә матур уның — Гөлнур. Тик алғы тештәре генә юҡ. Теш булмағас, ауыҙында һис кенә лә һүҙ тормай.

(Мостай Кәрим)

1. Текста нисә малай тураһында һүҙ бара?
2. Гөлнурға нисә йәш?
3. Иң шәп йүгергән малай кем?

Т **2.** Шиғырҙы уҡығыҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ.

### А что у вас?

**Кто** на лавочке сидел,
Кто на улицу глядел,
Толя пел, Борис молчал,
Николай ногой качал.



Дело было вечером,
Делать было нечего.
Галка села на заборе,
Кот забрался на чердак.
**Тут** сказал ребятам Боря
Просто так:
— **У меня** в кармане гвоздь.
А **у вас**?
— А **у нас** сегодня гость.
А у вас?
— А у нас сегодня кошка
Родила вчера котят.
Котята выросли немножко,
А есть из блюдца не хотят.

(Сергей Михалков)

Т **3.** «Беҙҙең урам балалары» тигән темаға төркөмдә һөйләшеү ҡороғоҙ.

**ҡушамат** — кличка
**кис көнө** — вечером
**һипкел** — веснушки
**алғы тештәр** — передние зубы
**ғәҙәт** — привычка
**ҡунаҡ** — гость

**күҙҙәрен сылт-сылт йома** — часто моргает
**ауыҙында һүҙ тормай** (фраз.) — болтливый (-ая)
**ыҫмала төҫлө ҡара сәсле** — волосы чёрные как смола
**сандыр кәүҙәле** — худощавый

## 23 Беҙҙең уйындарыбыҙ

## Алмаш

А **1.** Тексты тыңла.

Беҙҙең класс бик татыу. Тәнәфестә төрлө уйындар уйнайбыҙ. Зифа апай беҙгә ҡыҙыҡ уйындар өйрәтте. Беҙ бигерәк тә «Энә, еп, төйөн» тигән уйынды яратабыҙ. Еп менән төйөн гел энә артынан ҡалмай йөрөргә тейеш. Ә беҙ уларҙы яңылыштырабыҙ. Шунан яңы энә, еп, төйөн һайлана. Күңелле уйын!



**2.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Татыу булғас

Ҡом тауында уйнарға
Сыҡҡанбыҙ бөгөн күмәк.
Бөтәбеҙгә бер көрәк бар,
Бөтәбеҙгә — бер күнәк.
Рәхәтләнеп уйнаныҡ,
Булһаҡ та бик-бик күмәк.
Татыу булғас, уйнар өсөн
Етте беҙгә бер көрәк,
Етте беҙгә бер күнәк.

(Ринат Хәйри)

Т **3.** Уйынды төркөмдә уйнап ҡарағыҙ.

## Төпсөр

Уйынды алып барыусының бөтә һорауҙарына ла [а] ([б], [в], [ә] һ. б.) өнөнә башланған һүҙ менән яуап бирергә кәрәк. Кем яңылыш әйтә, шул уйындан сыға бара.

— Исемең кем?
— Айрат.
— Ә фамилияң?
— Аҡбулатов.
— Һин ҡайҙан килдең?
— Асҡындан.
— Нимә яратаһың?
— Алма.

Һеҙ ниндәй уйындар яратаһығыҙ? Әңгәмә ҡороғоҙ.

**татыу** — дружный (-ая, -ое)
**уйын** — игра

**энә** — иголка
**еп** — нитка
**төйөн** — узел
**яңылыштырабыҙ** — запутываем

## 24 Беҙҙең уйындарыбыҙ
## Алмаш

А **1.** Һанашмаҡты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Туғыҙ тырма

Бер тырма,
Ике тырма,
Өс тырма,
Дүрт тырма,
Биш тырма,
Алты тырма,
Ете тырма,
Һигеҙ тырма,
Туғыҙ тырма —
Бында торма!

1. Һанашмаҡты ҡасан әйтәләр?
2. Һин ниндәй һанашмаҡ беләһең?

Т **2.** Тексты уҡығыҙ, уйынды уйнағыҙ.

### Боҙоҡ телефон

Балалар бер рәткә теҙелеп ултыра. Уйынды алып барыусы беренсе баланың ҡолағына шым ғына бер һүҙ әйтә. Ул — икенсеһенә, икенсеһе — өсөнсөһөнә. Шулай итеп, беренсе әйтелгән һүҙ һуңғы кешегә барып етергә тейеш. Алып барыусы иң аҙаҡҡы кешенән: «Ниндәй һүҙ?» — тип һорай. Һүҙ ғәҙәттә үҙгәргән була. Һүҙҙе кем үҙгәрткәнен белер өсөн, һәр уйынсы үҙе ишеткән һүҙҙе әйтеп сыға. Уйын шулай дауам итеп, иң беренсе



бала ултырған ергә килеп етһә, ул алып барыусы була. Уйындың шарты: һүҙҙе ике тапҡыр әйтергә ярамай. Һүҙҙе ишетмәй ҡалған бала, уйын туҡтамаһын өсөн, үҙе һүҙ уйлап әйтеп ебәрә.

(«Бала-сағаның уйын фольклоры» китабынан)

Ни өсөн был уйын «Боҙоҡ телефон» тип атала?

П **3.** Шаян һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Машинаның ниндәй тәгәрмәсе әйләнмәй?
2. Ҡара бесәйгә ҡасан өйгә инеү уңайлы?
3. Урманға нимә менән баралар?
4. Ҡаҙ, һыуҙан сыҡҡас, ни эшләй?
5. Кәзә 6 йәш тулғас, ни эшләй?

**һанашмаҡ** — считалка
**бында** — здесь
**уйынсы** — игрок

**тырма** — грабли
**уңайлы** — (зд.) удобно
**әйләнмәй** — не крутится
**әйтелгән һүҙ** — сказанное слово
**боҙоҡ** — испорченный (-ая, -ое)

## 25 Минең тыуған ауылым/ҡалам

## Һан

**1.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.




ауыл



ҡасаба



ҡала



баш ҡала

**!**

**Һан** (числительное) предметтың һанын белдерә. **Нисә? күпме?** (сколько?) һорауҙарына яуап бирә. Рус теле менән сағыштыр, ниндәй айырма күрҙең? Мәҫәлән: бер — один, одна, одно, одни; ике — два, две; ике**гә** — к двум; ике**нән** — от двух.

**2.** Шиғырҙы тасуири уҡып өйрән.



Тыуған ерем — Башҡортостан
Кемгә төйәк булмаған.
Башҡорт, урыҫ балалары
Бергә сығып уйнаған.
Үҫеп еткәс, Рәсәй илен
Һаҡларға бергә киткән.
Уртаҡ Ватан — Рәсәй иле
Һәр кемгә ғәзиз икән.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

Это интересно

Посёлки — населённые места от 0,5 тыс. до 12 тыс. жителей, преобладающая часть населения которых связана с промышленным производством, транспортом или обслуживанием.

Сельские населённые места подразделяют на деревни и сёла. Деревня — это малое поселение, село — более крупное, которое является административным, производственным, сельскохозяйственным центром.

http://stroy-server.ru/klassifikatsiya-naselennykh-mest

**3.** Уҡы. Текстҡа таянып, тыуған төйәгең тураһында һөйләргә өйрән.

Минең тыуған төйәгем — Таймаҫ ауылы. Ул Көйөргәҙе районында урынлашҡан. Таймаҫ — ҙур ауыл. Ул ике өлөштән тора: Таймаҫ һәм Яңы Таймаҫ. Ауылымда бөтәһе 835 кеше йәшәй. Таймаҫтан билдәле яҙыусы Рәшит Сол-

тангәрәев, композитор Айрат Ҡобағошов, скульптор Өлфәт Ҡобағошов, профессор Илдус Ибраһимов сыҡҡан. Мин ауылымды яратам.

(http://ru.wikipedia.org/wiki/Таймасово)

**ҡасаба** — посёлок
**баш ҡала** — столица
**ауыл** — деревня, село
**ҡала** — город

**илен һаҡларға** — защищать родину
**ғәзиз** — дорогой (-ая, -ое)

## 26 Минең тыуған ауылым/ҡалам һан

A **1.** Тексты тыңла, һорауға яуап бир.

Минең тыуған төйәгем — Өфө ҡалаһы. Өфө — Башҡортостандың баш ҡалаһы. Ул ҙур һәм матур. Унда 1 105 667 кеше йәшәй. Ул 708 кв. км майҙанды биләй. Өфө 7 районға бүленгән: Киров, Ленин, Совет, Дим, Орджоникидзе, Октябрь, Калинин. Өфөлә музейҙар, театрҙар, юғары уҡыу йорттары күп.

Башҡортостандың баш ҡалаһы тураһында нимә беләһең?

! Башҡорт телендә **ябай** (простые) һәм **ҡушма** (составные) **һандар** була: бер, өс, ун бер, ун өс. Рус теле менән сағыштыр, ниндәй айырма бар: биш йөҙ — пятьсот, ун ете — семнадцать.

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Әҙилә, һин ҡышҡы каникулдарҙа ни эшләйһең?
— Мин өләсәйем менән олатайыма барам.
— Улар ҡайҙа йәшәй?
— Улар Бишбүләк районы Ҡасҡын ауылында йәшәй.
— Ә ул ауыл алыҫмы?
— Беҙҙең ауылға Өфө ҡалаһынан 245 км.
— О-о-о. Нисә сәғәт бараһығыҙ?
— 3 сәғәттә ҡайтып етәбеҙ.

— Ә минең өләсәйем Шишмәлә йәшәй. Беҙ унда тиҙ генә ҡайтып етәбеҙ. Өфөнән Шишмәгә тиклем 57 километр. Өфөнән Шишмәгә электричка менән дә барып була.

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Өфө



Өфө — беҙҙең баш ҡалабыҙ,
Башҡортостан гүзәле.
Бик борондан булған бында
Башҡорттарҙың үҙәге.

Өфө бейек тау башында,
Бейек уның йорттары.
Бейектәргә әйҙәп тора,
Яҡты уның уттары.

(Рәшит Шәкүр)

**4.** Үҙеңдең тыуған төйәгең тураһында мәғлүмәт әҙерлә.

**Это интересно**

Самое старое здание в Уфе — жилой одноэтажный дом на улице Октябрьской революции, 57/1, принадлежавший известному горнозаводчику Демидову. Здание было построено в середине XVIII века.

Под городом располагается система из 20 естественных пещер. Все входы в пещеры заглушены. Самая длинная пещера (Дудкинская) имеет протяжённость 2 620 метров, вход в неё заглушён.

http://www.bashedu.ru/node

**үҙәк** — центр

**бик борондан** — с древних времён
**уттар** — огоньки
**тау башында** — на вершине горы

## 27 Ауыл һәм ҡала тормошо һан

А **1.** Тексты тыңла.



Минең тыуған төйәгем — Күмертау ҡалаһы. Күмертау «угольная гора» тигәнде аңлата. Ул Өфө ҡалаһынан 250 км алыҫлыҡта урынлашҡан. Күмертау — бәләкәй ҡала. Унда 61 810 кеше йәшәй. Бында вертолёттар эшләйҙәр.

(http://ru.wikipedia.org/wiki/Кумертау)

**2.** Ике һүрәтте сағыштыр. Ҡала менән ауыл бер-береһенән нимәһе менән айырыла?






**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** кешеләр күп (аҙ), машиналар күп (аҙ), бейек (тәпәш) өйҙәр, ун (бер) ҡатлы йорттар, саф (бысранған) һауа, магазиндар күп (аҙ), баҡса үҫтерәләр, мал тоталар, светофорҙар бар (юҡ).

**Өлгө:** ҡалала заводтар эшләй.

**!** Башҡорт телендә **төп, рәт, йыйыу, кәсер һандары** була. Мәҫәлән: бер, ике, биш; беренсе, икенсе, бишенсе; берәү, икәү, бишәү; икенән бер, биштән ике.

**3.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

Стәрлетамаҡ ҡалаһына купец Савва Никифорович Тетюшев 1766 йылда нигеҙ һалған. «Стәрлетамаҡ» һүҙе (Стәрле — йылға атамаһы, тамаҡ — устье) «устье реки Стерли» тигәнде аңлата. Ул Өфөнән 120 км алыҫлыҡта урынлашҡан.

Стәрлетамаҡ ҙурлығы буйынса Башҡортостанда икенсе урында тора. Бында 278 678 кеше йәшәй. Ул 1920–1922 йылдарҙа Башҡортостандың баш ҡалаһы була.

Стәрлетамаҡта 17 ҙур завод эшләй. 1970 йылда Стәрлетамаҡ бысраҡ ҡала һанала. Кешеләр күп итеп ағас ултырта башлай. 15 йыл эсендә ул ныҡ үҙгәрә, Рәсәйҙең иң йәшел, таҙа ҡалалары иҫәбенә инә башлай.

(http://ru.wikipedia.org/wiki/Стерлитамак)

1. Стәрлетамаҡ ҡалаһына нигеҙ һалыныуға быйыл нисә йыл була?
2. «Стәрлетамаҡ» һүҙе нимә аңлата?
3. Ҡалала нисә завод эшләй?
4. Кешеләр Стәрлетамаҡтың экологияһын нисек яҡшырта?

**күп** — много
**аҙ** — мало
**саф һауа** — свежий воздух
**бысранған һауа** — загрязнённый воздух

**баҡса үҫтерәләр** — выращивают сад
**мал тоталар** — держат скотину
**нигеҙ һалған** — основал

## 28 Ауыл һәм ҡала тормошо һан

A **1.** Тексты тыңла.

Минең олатайым менән өләсәйем Дәүләкән районы Алға ауылында йәшәй. Ауыл Асылыкүл буйында урынлашҡан. Унда рәхәт. Саф һауа, экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлек. Йәй көнө Асылыкүлдә һыу инәбеҙ, балыҡ тотабыҙ. Ҡыш көнө хоккей уйнайбыҙ, сана шыуабыҙ. Асылыкүл — Башҡортостандағы иң ҙур күл.

П **2.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Йәйге каникулда Әҙилә олатаһы менән өләсәһенә ауылға бара. Ауылда уның Әминә исемле әхирәте бар. Бер көн Әминә менән Әҙилә бәхәсләшеп китте:

— Ауылда йәшәү рәхәтме, ҡалаламы? — тип һораны Әминә.

— Ҡалала, — тине Әҙилә.

— Юҡ, ауылда, — тине Әминә.

— Ҡалала кинотеатрға барырға, каруселдә йөрөргә була. Мәктәптән һуң компьютерҙа ултыраһың, бер ниндәй ҙә эш юҡ. Төрлө түңәрәктәр эшләй: музыка, һүрәт төшөрөү һәм башҡалар. Ял көнө әсәйем менән магазиндар буйлап йөрөргә була.

— Ауылда ла компьютер бар. Түңәрәктәр ҙә етерлек: бәйләү, йыр, бейеү. Ауылда тыныс, саф һауа, һыу ҙа таҙа. Ҡалала таҙа һыуҙы һатып алалар. Йәшелсә-емеш баҡсала үҫә. Магазиндан һатып алмайбыҙ.

1. Был бәхәстә кем хаҡлы?
2. Ауыл һәм ҡала тормошо бер-береһенән тағы ла нимәһе менән айырыла?

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Тыуған илем



Бына минең өй,
Был минең урам,
Ошо юлдан гел
Мәктәпкә барам.
Был минең ауыл,
Тауҙарҙан бейек.
Кешеләр алсаҡ,
Ә халҡым бөйөк!

(Земфира Аҡбутина)

**минең ауыл** — моя деревня (село)
**ауыл тормошо** — деревенская жизнь

**рәхәт** — хорошо
**алсаҡ кеше** — приветливый человек
**халыҡ** — народ
**бөйөк** — великий (-ая, -ое)
**бәхәсләшеү** — спорить

## 29 Ҡалалағы һәм ауылдағы эштәр
### һан

A **1.** Тексты тыңла.

Мин Нефтекама ҡалаһында йәшәйем, башҡорт гимназияһының 4-се класында уҡыйым. Атайым Нефтекама автозаводында инженер булып эшләй. Унда НефАЗ автобустарын сығаралар. Был автобустарҙы Өфө, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй һәм башҡа ҡалалар урамдарында күрергә була. Әсәйем — филармония йырсыһы. Филармония артистары Бәләбәй, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Ишембай ҡалаларына гастролгә йөрөй.

**2.** Рус халыҡ әкиәтен уҡы, һорауҙарға яуап бир.

### Айыу менән бабай

Бер ваҡыт айыу менән бабай дуҫлашып алғандар. Улар бергәләп шалҡан сәсергә уйлағандар. Бабай айыуға:
— Тамыры миңә, япрағы һиңә булыр, — тигән. Шалҡан бик яҡшы уңған. Бабай үҙенә тамырын алған, ә айыуға япрағын биргән. Айыу мығырлап-мығырлап ҡараған да, ни хәл итһен, шулай һөйләшелгән бит инде.
Икенсе йыл бабай айыуға:
— Әйҙә, тағы ла бергә сәсәйек, — тигән.

— Әйҙә, — тип риза булған айыу. — Тик был юлы һин һабағын алырһың, ә миңә тамырын бирерһең.

— Ярар, — тигән бабай, — һинеңсә булыр. Был юлы улар бойҙай сәскәндәр. Бойҙай ҙа бик шәп уңған. Бабай башағын, ә айыу һаламын алған. Айыу тағы ла алданған.

Шул көндән айыу менән бабайҙың дуҫлығы ла бөткән.

1. Бабай менән айыу ниндәй эштәр башҡарған?
2. Ниңә айыу менән бабайҙың дуҫлығы бөткән?
3. Бабай айыуҙы ни өсөн алдай алған?

**Т** **3.** Ҡалалағы эштәр тураһында мәғлүмәт әҙерләгеҙ.

**һинеңсә** — по-твоему

**тамыр** — корень
**шалҡан** — репа
**мығырлап-мығырлап ҡараған** — поворчал
**һабаҡ** — стебель
**бойҙай** — пшеница

## 30 Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары һан

**А** **1.** Тексты тыңла.



Минең олатайым Бөрйән районында йәшәй. Был район солоҡ балы менән дан тота. Башҡорт балын хатта Америка магазиндарында һаталар. Минең олатайымдың да бал ҡорттары бар. Ул апрель-май айынан сентябрь-октябргә тиклем бал ҡорттарын ҡарай. Олатайым тәмле бал менән балаларын да, килгән ҡунаҡтарҙы ла һыйлай.

Т **2.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Башҡортостанда 54 район, 21 ҡала, 2 ҡасаба, 4 434 ауыл бар. Республиканың иң ҙур районы — Белорет районы. Райондың майҙаны 11 501 кв. км. Уның территорияһында ун ике тәбиғәт һәйкәле бар: Ямантау (1 640 м), Ирәмәл (1 582 м), Әрүәк Рәзе (1 068 м), Ар ташы, Ҡыҙыл яр мәмерйәһе, Атыш шарлауығы, Ассы минераль һыу сығанағы, 1904 йылғы кедр культураһы, Бешәтәк тауындағы 600 йәшлек ҡарағастар, Әүжән урман хужалығында диңгеҙ бөркөтөнөң ояһы һ.б. Тап Белорет ерендә Башҡортостандың иң ҙур йылғалары: Ағиҙел, Инйәр, Йүрүҙән, Еҙем баш ала.

1. Башҡортостандағы ниндәй ҡалаларҙы беләһең?
2. Башҡортостандың ниндәй райондарында булғаның бар?
3. Белорет районы нимә менән билдәле?
4. Һеҙ барған райондар нимә менән билдәле?

**3.** Һин был кешеләрҙе беләһеңме? Улар тураһында мәғлүмәт әҙерлә.


Әхмәтзәки Вәлиди


Муса Гәрәев


Мостай Кәрим


Ирек Зарипов

**билдәле** — известный (-ая, -ое)
**тәбиғәт һәйкәле** — памятник природы

**мәмерйә** — пещера
**шарлауыҡ** — водопад
**диңгеҙ бөркөтө** — морской орёл

## 31 Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары һан

**А** **1.** Тексты тыңла.



Раевка — Әлшәй районының үҙәге. Раевкала 19 557 кеше йәшәй. Бында билдәле Рәсәй спортсыһы, художестволы гимнастика буйынса атҡаҙанған спорт мастеры, донъя һәм ике тапҡыр Европа чемпионы, художестволы гимнастика буйынса халыҡ-ара спорт комментаторы Ләйсән Үтәшева тыуған.

(http://ba.wikipedia.org/wiki/Раевка)

**!** Башҡорт телендә даталарҙы яҙғанда һандарға ялғау ҡушылмай: 25 май, 2017 йыл, 10 март.

**П** **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

— Өләсәй, миңә тыуған төйәгем тураһында мәғлүмәт йыйырға ҡуштылар. Ярҙам итәһеңме?

— Ярай.

— Өләсәй, беҙҙең Сәйетбаба ауылына нисә йыл?

— Сәйетбабаға 1704 йылда нигеҙ һалынған. Нисә йыл була икән, иҫәплә әле, балам.

— Әле 2016 йыл, тимәк, 312 йыл. Өләсәй, беҙҙең ауыл һымаҡ ҙур ауылдар Башҡортостанда тағы ла бармы?

— Сәйетбаба, улым, республикала иң ҙур башҡорт ауылы.

— Өләсәй, тағы нимә яҙайым икән?

— Ауылды кешеләр данлай. Беҙҙең ауылдан да билдәле кешеләр сыҡҡан. Мәҫәлән, академик Ғиниәтулла Ҡунафин, диктор Лира Фәйзуллина, яҙыусы Гөлнур Якупова.

— Өләсәй, ҡайһылай күп беләһең һин. Рәхмәт.

**3.** «Башҡортостан ҡалалары» темаһына сығыш әҙерлә.

Это интересно

Темясово — село в Баймакском районе, первая столица Башкирии.

Первоначально деревня была известна как Каипкай, потом село получило название от имени Темяса Илекеева, участника башкирских восстаний.

С этим селом связаны имена выдающихся личностей Башкортостана, таких как Ахмет-Заки Валиди, Муса Муртазин, Шагит Худайбердин и т. д.

В 1994 году в селе Темясово создан башкирский историко-культурный центр «Темясово».

http://kak-selo-temyasovo-stalo-stolitsey.html

**донъя** — мир

**атҡаҙанған** — заслуженный (-ая, -ое)

# 32 Тыуған ерем мөғжизәләре һан

**А** **1.** Тексты тыңла.

Көйөргәҙе районында бәләкәй генә ауыл бар. Унда 157 кеше йәшәй. Был ауылды батырҙар ауылы тиҙәр. Кинйәабыҙ ауылына 1770 йылда Кинйә Арыҫланов — Пугачёв яуы полковнигы, башҡорт дворяны, старшина нигеҙ һала. Уның ейәне Хәлил Һабансин 1812 йылғы француз походында полк муллаһы булып ҡатнаша. Ошо уҡ ауылдан өс Советтар Союзы Геройы сыҡҡан. Шуларҙың береһе, Ғәфиәт Арыҫланов, башҡорттар араһында беренсе булып Советтар Союзы Геройы була.

(http://ba.wikipedia.org/wiki/Кинья-Абыз)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| ҡурсаулыҡ | тәбиғәт паркы | милли парк |

**3.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

Республика территорияһында өс ҡурсаулыҡ («Башҡортостан», «Шүлгәнташ», «Көньяҡ Урал»), «Башҡортостан» Милли паркы, дүрт тәбиғәт паркы («Асылыкүл»,

«Ҡандракүл», Ирәмәл, «Моразым» тарлауығы), 29 дәүләт тәбиғәт заказнигы урынлашҡан.

(http://nashural.ru/Mesta/ozero-aslikul.htm)

1. Шүлгәнташ ҡурсаулығы тураһында нимә беләһең?
2. Ҡурсаулыҡтар, тәбиғәт парктары, заказниктар ни өсөн кәрәк?
3. Тәбиғәтте нисек һаҡлап була?

Это интересно

В Нуримановском районе нашей республики находится родник Красный Ключ — самый мощный водный источник в России и второй по величине в мире! По расходу воды его немного опережает только источник Фонтен де Воклюз во Франции. Неудивительно, что эта достопримечательность Башкортостана имеет статус гидрологического памятника природы федерального значения.

http://ru.wikipedia.org/wiki/Красный_Ключ_(родник)

**тарлауыҡ** — ущелье
**ҡурсаулыҡ** — заповедник
**милли парк** — национальный парк

**ҡатнаша** — участвует

## 33 Тыуған ерем мөғжизәләре һан

А **1.** Тексты тыңла.

Асылыкүл — Башҡортостандың иң ҙур күле. Күл өҫтөнөң майҙаны 23,5 кв. км, уртаса тәрәнлеге 5,1 м.

Асылыкүл «әсе күл, тоҙло күл» тигәнде аңлата. Ул Дәүләкән ҡалаһынан 27 км алыҫлыкта урынлашҡан.

(«Башҡортостан энциклопедияһы»нан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| мәмерйә | шарлауыҡ | сығанаҡ |

П **3.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, дауам итегеҙ.

— Атай, һин студент саҡта Башҡортостан буйлап күп сәйәхәт иткәнһең. Әйт әле, ниндәй район иң матуры?

— Бөтәһе лә матур.

— Әйҙә мин районды әйтәм, ә һин унда нимә бар икәнен әйт.

— Ярай.

— Салауат районы.

— Унда 4 тәбиғәт ҡомартҡыһы бар: Янғантау тауы, Күсәләр көкөртлө-водород сығанағы, Ҡорғаҙаҡ шишмәһе, Лаҡлы мәмерйәһе.

— Мәләүез районы.

— Унда Күперле шарлауығы, Нөгөш һыуһаҡлағысы бар.

— Ғафури районы.

— Красноусол минераль һыу сығанаҡтары.

— ...

**сығанаҡ** — источник
**оҙонлоҡ** — длина
**киңлек** — ширина
**тәрәнлек** — глубина

**сәйәхәт итеү** — путешествовать
**бөтәһе лә** — все

## Ай Уралым, Уралым...

Урал — тәбиғәте ғәжәйеп матур, йәнлектәргә, ҡош-ҡортҡа, ҡаҙылма байлыҡтарға бай ер. Урал — Европа менән Азия сиктәрендә ятҡан, 2000 саҡрымдан ашыуға һуҙылған, киңлеге 40–60 саҡрымға еткән тауҙар иле... Уның иң бейек тауҙары — Ямантау (1640 м), Оло Ирәмәл (1582 м), Кесе Ирәмәл (1449 м).

Йәмле Урал тауҙарына, Ирәмәл буйҙарына таң ҡалмаған кеше юҡ. Мәскәүҙән килгән илгиҙәр, сәнғәт белгесе Сергей Лебедев һоҡланыуын белдереп, бына шулай яҙған: «Был Рио-де-Жанейро һәм Сан-Франциско ла түгел. Йөҙ тапҡыр яҡшыраҡ!»

Йәнә Көньяҡ Урал, Яйыҡ буйы тәбиғәтенә иҫе-һушы китеп, туҡтауһыҙ фотоға төшөрөп йөрөгән Мәскәү журналисы: «Бында бәхетле кешеләр йәшәй!» — тигәйне. Бөйөк һүҙ оҫтаһы Шәйехзада Бабич бына нисек тасуирлаған Уралды:

Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур;
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр.
Башҡортостан – гөлбостан,
Сөнбөлстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!

(С. Бәҙретдинов, Т. Биҡҡужина)

## 34 Телмәр үҫтереү
## һан




1. ӨФӨ
2. Ағиҙел
3. Баймаҡ
4. Бәләбәй
5. Белорет
6. Бөрө
7. Благовещен
8. Дүртөйлө
9. Дәүләкән
10. Ишембай
11. Күмертау
12. Мәләүез
13. Межгорье
14. Нефтекама
15. Октябрьский
16. Салауат
17. Сибай
18. Стәрлетамаҡ
19. Туймазы
20. Учалы
21. Яңауыл



Мораҙым тарлауығы



Торатау



Ахун менгирҙары



Ҡандракүл

# Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ

## 35 Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә?
**Рәүеш**

A **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Бер йылда дүрт миҙгел. Ҡыштан һуң яҙ, яҙҙан һуң йәй, йәйҙән һуң көҙ килә. Һәр миҙгел үҙенсә матур, ҡыҙыҡлы. Яҙын бар тәбиғәт уяна. Гөрләүектәр йүгерә, ҡар ирей, ҡоштар ҡайта. Йәй беҙҙе эҫе көндәре, матур сәскәләре, тәмле еләктәре менән ҡыуандыра. Көҙ көнө ағастарҙың япраҡтары төрлө төҫкә инә. Ҡыш ап-аҡ ҡар, яратҡан Яңы йыл байрамы менән һөйөндөрә. Конькиҙа йөрөйһөң, санала, саңғыла шыуаһың.



1. Нисә йыл миҙгеле бар?
2. Көҙҙән һуң ниндәй миҙгел килә?
3. Йәй беҙҙе нимә менән ҡыуандыра?
4. Ҡыштың билдәләрен әйт.

**П** **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

— Атай, һин ниндәй йыл миҙгелен яратаһың?
— Мин ҡышты яратам. Ә һин?
— Миңә йәй оҡшай. Ниңә гел йәй булмай икән?
— Миҙгелдәр алмашынып тора, улым.
— Ә ни өсөн?
— Сөнки Ер шары Ҡояш тирәләй әйләнә. Әйҙә был турала энциклопедиянан уҡыйыҡ.
— Әйҙә.

**Т** **3.** Төркөмдәрҙә әңгәмә ойоштороғоҙ.

1. Ни өсөн йәйен көн оҙон, төн ҡыҫҡа? Ә ҡышын киреһенсә?

2. Африкала йәшәүсе балаларҙың ҡар менән уйнағандары юҡ. Ни өсөн?

**4.** Диалогты тултырып, ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

— Нина Ивановна, Ер Ҡояш тирәләй нисә көн әйләнә?
— ...
— Ә Ай Ер тирәләй нисә көн әйләнә?
— ...
— Ә ниңә көн менән төн бар?
— ...
— Ҡояш бер ҡасан да һүнмәйме?
— ...

### Это интересно

Наша Земля вращается вокруг Солнца. Солнце — очень горячая и яркая звезда, которая греет Землю. Земля движется в космическом пространстве по своей орбите. Но земная орбита не круглая, а вытянутая. Потому планета, на которой мы живём, то приближается к Солнцу, то удаляется от него. Земля вращается вокруг своей оси, и день на нашей планете сменяется ночью. Земная ось немного наклонена, потому Солнце нагревает поверхность Земли по-разному — где-то сильнее, где-то меньше. Потому на планете бывает и зима, и лето, и весна, и осень.

http://ya-uznayu.ru/priroda

**оҙон** — длинный (-ая, -ое)
**ҡыҫҡа** — короткий (-ая, -ое)
**Ер шары** — Земной шар
**эҫе** — жарко

**ауышлыҡ** — наклон
**үҙ күсәре тирәләй әйләнеү** — вращение вокруг своей оси
**баҙыҡ йондоҙ** — яркая звезда
**алмашына** — сменяется
**һөйөндөрә** — радует

## 36 Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә?
## Рәүеш

А **1.** Тексты тыңла, һорауға яуап бир.

Ер — бик ҡыҙыҡлы планета. Беҙҙең планетала һәр ваҡыт эҫе йә һыуыҡ була. Мәҫәлән, Антарктидала ҡар һәм боҙ бер ҡасан да иремәй. Ә эҫе Африкала ҡарҙы

күргәндәре юк. Ҡайҙалыр һәр ваҡыт ямғыр яуа, ә сүллектә бөтөнләй ямғыр булмай. Ни өсөн тип уйлайһың?

П **2.** Әкиәтте уҡығыҙ. Үҙегеҙ ҙә әкиәт уйлап ҡарағыҙ.

## Ҡыш һәм Йәй

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Ҡыш менән Йәй. Улар гел генә бәхәсләшкән, ти. Йәй:

— Мин кешеләргә кәрәк. Йәй көнө улар йәшелсә, емеш ашайҙар, ҡояшта ҡыҙыналар, һыу инәләр. Ә һин кәрәкмәйһең, — ти икән.

— Мин булмаһам, ҡар булмаҫ ине. Ә балалар ҡышын рәхәтләнеп сана, саңғы шыуа, ҡар бабай яһай, — ти Ҡыш. — Әйҙә көс һынашайыҡ. Кемебеҙ кәрәгерәк икән?

Ҡыш ергә һыуыҡ ебәрә, бөтә нәмә туңа башлай. Йәй үләндәрҙе, хайуандарҙы, бөжәктәрҙе, ҡоштарҙы йәлләй:

— Әйҙә, ергә сиратлашып йөрөйөк, — ти.

Ҡыш ризалаша. Шунан бирле улар ергә сиратлап ҡунаҡҡа килә, ти. Үҙҙәре менән бер ҡыҙ, бер малай ҙа алып киләләр икән. Улары Яҙ менән Көҙ исемле була. Шулай итеп, йылды дүрт миҙгелгә бүлеп, кешеләргә матурлыҡ килтерә, ти, улар.

(«Мәктәп календары»нан)

Т **3.** Һүҙбәйләнештәрҙе уҡығыҙ, сағыштырығыҙ. Эш дәфтәрендә һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

**яҡшы** уҡыусы — **яҡшы** уҡый
**матур** сәскә — **матур** яҙа
**ҡыҙыҡ** китап — **ҡыҙыҡ** һөйләй

Это интересно

Времена года — четыре периода, на которые условно поделён годовой цикл. Различают:

1) календарные времена года — в большинстве стран мира принято деление года на четыре сезона, по три календарных месяца в каждом. Индийский календарь делит год на 6 сезонов, по 2 месяца в каждом, а календарь саамов — на восемь;

2) астрономические времена года, которые отсчитываются от точек солнцестояния (зима, лето) и равноденствия (осень, весна).

https://ru.wikipedia.org/wiki

**һәр ваҡыт** — всегда

**сүллек** — пустыня
**келәм** — ковёр
**түкте** — вылил
**сиратлашып** — по очереди

## 37 Йәнлектәр йыл миҙгелен беләме?
## Рәүеш

**1.** Шиғырҙы тасуири уҡы. Тәржемә ит.

Тәбиғәткә көҙ килде,
Һары балаҫын йәйҙе.
— Урманға мин хужа, — тип,
Ҡыуып ебәрҙе йәйҙе.

Көлтә ҡойроҡ тейендәр
Ҡышҡыға бәшмәк йыйҙы.
Айыу йоҡоға талды,
Йәйгеһен ашап туйҙы.

Ҡуян, бүре, төлкөгә
Түгел бер ни йыяһы.
Тик ҡуянға кәрәк әле
Аҡ тун ғына кейәһе.

(Айзилә Ғәлиастанова)

1. Йәнлектәр йыл миҙгелен беләме?
2. Улар ҡышҡылыҡҡа нисек әҙерләнә?

**2.** Һүрәткә ҡарап, һорауҙарға яуап бир.




1. Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә?

2. Һүрәттә ниңә 22 декабрь, 21 июнь, 21 март, 23 сентябрь айырып күрһәтелгән?

П **3.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, дауам итегеҙ.

— Һаумы, Тейен дуҫ!

— Һаумы, Ҡуян дуҫ!

— Ҡайҙа китеп бараһың?

— Ҡышҡылыҡҡа бәшмәк, сәтләүек йыям. Тиҙҙән ҡыш етә бит.

— Ә мин бер нәмә лә йыймайым. Тунымды ғына алмаштырам.

— Һиңә рәхәт икән.

— Бер ҙә рәхәт түгел шул...

Ни өсөн ҡуянға ҡышын рәхәт түгел?

**4.** Көләмәсте уҡы.

Әсәһе Раянға ҡуян тиреһенән тегелгән бүрек һатып ала.

— Әсәй, бүрегем йәй һоро, ә ҡышын аҡ буласаҡмы? — тип һорай улы.

### Это интересно

Самые длинные и самые короткие дни в году называются днями летнего и зимнего солнцестояния. Летнее солнцестояние наступает 20, 21 или 22 июня, а зимнее — 21 или 22 декабря. А ещё во всём мире в каждом году имеются двое суток, когда день равен ночи. Это происходит весной и осенью, ровно между днями солнцестояния. Осенью это происходит около 23 сентября — это осеннее равноденствие, весной около 21 марта — весеннее равноденствие.

http://allforchildren.ru/Почемучка/why52.php

**ҡышҡылыҡҡа** — к зиме
**әҙерләнә** — готовится
**тунын алмаштыра** — меняет мех

**көлтә ҡойроҡ тейен** — белка с пышным хвостом
**ашап туйҙы** — наелся

## 38 Йәнлектәр йыл миҙгелен беләме?
### Рәүеш

А **1.** Тексты тыңла.

Йәнлектәр ҙә ҡышҡа әҙерләнә. Төлкөләр бесән, һалам кәбәндәре янына йыйыла. Ҡуяндар тунын алмаштыра.

Бурһыҡтар, тейендәр ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ әҙерләй. Сентябрь аҙағында терпеләр йоҡоға тала. Күсмә ҡоштар көньяҡҡа оса.



П **2.** Бөгөнгө һауа торошо тураһында һөйләшегеҙ. Диалог төҙөгөҙ.

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:** болотло, аяҙ көн, ҡар яуа, һыуыҡ, һалҡын, ел, иҫә.

**3.** Шиғырҙарҙы тасуири уҡы. Оҡшағанын ятла.

Сынығабыҙ саф һауала,
Күңелле үтә ҡыштар.
Етеҙ коньки, саңғы, сана —
Беҙҙең иң яҡын дуҫтар.

(Гөлшат Зәйнәшева)

Аҡ ҡар баҫҡан яланды,
Ҡуралалрҙы, соланды.
Ябалаҡлап ҡар яуа,
Бөгөн буранлы һауа.

(Ғабдулла Туҡай)

Шажлап ҡына түбән оса,
Эй шәп шыуа санабыҙ.
Ҡайһы саҡта тау битендә
Тәкмәс атып ҡалабыҙ.

(Сафуан Әлибаев)

Шиғырҙарҙан **нисек? ҡасан?** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табып уҡығыҙ.

**4.** Әкиәтте уҡы, һөйлә.

## Айыу ниңә ҡышын йоҡлай?

Бер кеше урманға барған. Унда айыу ағаста бал ҡорттарының ояһын туҙҙыра икән. Кеше айыуҙың ҡой-роғон сабып өҙгән. Йәй көнө ҡойроҡтоң ҡыҫҡа икәнлеге күренмәй. Көҙ көнө, япраҡтар ҡойолғас, айыуҙың ҡыҫҡа ҡойроғо күренә башлай. Йәнлектәр айыуҙан көлә. Шуға айыу ҡыш көнө йоҡлай икән.

(Жәлил Кейекбаевтан)

**бурһыҡ** — барсук
**етеҙ** — быстрый (-ая, -ое)
**күсмә ҡоштар** — перелётные птицы

**сынығабыҙ** — закаляемся
**ҡура** — двор (хлев)
**солан** — чулан (сени)
**һалам** — солома
**бесән** — сено
**тәкмәс атыу** — кувыркаться

## 39 Бөжәктәр нисек йәшәй?

## Рәүеш

А **1.** Шиғырҙы тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Ҡыш етеп килә,
Ҡуян тиҙ елә.
Иренмәй ҡуян,
Килтермәй зыян,
Ҡарғаны әрләй:
«Һин, ҡарға, тик ултырып,
Файҙа булмаç ҡысҡырып,
Ҡышҡа аҙыҡ әҙерлә,
Ашарыңды һин уйла!»
Ҡарға уны тыңламай,
Ул ҡышҡа бик ҡайғырмай.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

1. Йәнлектәр, ҡоштар ҡышты нисек үткәрә?
2. Бөжәктәр ҡышын нисек йәшәй?
3. **Тиҙ** һүҙе ниндәй һорауға яуап бирә?

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, дауам итегеҙ.

— Һин бөжәктәрҙе күҙәтергә яратаһыңмы?
— Эйе, яратам. Миңә бигерәк тә күбәләктәр оҡшай.
— Иң егәрле бөжәк нимә, беләһеңме?
— Әлбиттә, беләм. Ул бал ҡорто.
— ...

П **3.** Әкиәтте уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

## Күбәләк менән бал ҡорто

Бер көндө Наҙлыҡай исемле бал ҡорто татлы һут йыйырға тип сәскәле яланға киткән. Күңелле итеп безелдәгән Наҙлыҡай эргәһенә килеп ҡунған күбәләкте лә күрмәгән.

Күбәләктең өҫтөндә ҡыҙыл бәрхәт күлдәк икән. Ул үҙенең матурлығы менән маҡтанырға уйлаған.

— Һин кем?

— Мин Наҙлыҡай. Ә үҙең кем?

— Мин Матурҡай, — тигән күбәләк. — Күрәһеңме минең матур күлдәгемде? Ә һинең күлдәгең һоро-һары.

Наҙлыҡай:

— Күлдәгем һоро булһа ла, дуҫтарым мине ярата. Ә һин үҙең маҡтаныуҙан башҡа ниндәй эш эшләйһең? — тигән.

— Мин сәскәләрҙе һеркәләндерәм, — тигән күбәләк. — Ә һин үҙең ниндәй файҙа килтерәһең?

— Мин дә үҫемлектәрҙе һеркәләндерәм. Кешеләргә шифалы бал йыям. Башҡорт балы көс бирә, ул сит илдәрҙә лә билдәле. Космонавтар ҙа йыһанға үҙҙәре менән башҡорт балын ғына ала.

Күбәләк бал ҡортоноң эше күп булыуына аптыраған. Ошонан һуң ул башҡаса маҡтанмай башлаған.

(Роза Ғәббәсованан)

1. Бал ҡортоноң исеме нисек?
2. Күбәләктең күлдәге ниндәй төҫтә?
3. Бал ҡорто ниндәй файҙа килтерә?

## Күбәләк

Рәсимә Урақсина һүҙҙәре — Әлфиә Зиннурова музыкаһы

Леп-леп-леп, леп-леп-леп
Шатлана, бейей ул.
Сәскәнән сәскәгә
Хәл белеп йөрөй ул.

Йәйғоро әйләнә
Ҡанаты осонда.
Бәхете, шатлығы
Леп-леп-леп осоуҙа.

Сәскәләр һуттарын
Эсә лә күбәләк
Леп-леп-леп елпенә,
Сәскәләр тирәләп.

### Это интересно

Откуда насекомые узнают о предстоящей зиме? Для одних сигналом служит приход холодных августовских ночей; другие чувствуют, как становятся короче дни; у третьих как бы установлены внутри невидимые часы, которые ведут счёт жизни насекомого. Общее для всех только в одном: насекомые не знают, не думают о будущей зиме. Их организм сам, как бы автоматически, начинает выполнять всё то, что нужно для зимовки.

**күҙәтәм** — наблюдаю
**тиҙ, шәп** — быстро
**егәрле** — трудолюбивый (-ая, -ое)
**файҙа** — польза

**күрмәгән** — не заметила
**һеркәләндерәм** — опыляю
**маҡтаныу** — хвастаться

# 40 Бөжәктәр нисек йәшәй?

## Рәүеш

А **1.** Шиғырҙы тыңла. Был бөжәк тураһында нимә беләһең?



Ояһынан шыптыр-шыптыр
Ҡырмыҫҡа сығып килә,
Үҙенән дә ҙур үләнде
Өйөнә алып инә.
Тәүге ҡарҙар төшөү менән,
Ҡырмыҫҡа китә йоҡлап.
Һуңғы ҡарҙар иреү менән,
Эшкә керешә гөрләп.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ.

— Азат, һин күбәләктәр тураһында уҡығаның бармы?

— Эйе. Күбәләктәр оҙаҡ йәшәмәй, ғүмерҙәре бер нисә этаптан тора: йомортҡа, ҡарышлауыҡ, ҡурсаҡ, һуңынан күбәләк.

— Ә улар күрәме?

— Күбәләктәр ҡыҙыл, йәшел, һары төҫтө күрә. Аҙыҡтың тәмен аяҡтары аша һиҙәләр.

— Ҡыҙыҡ икән.

**3.** Тексты уҡы.

Ҡырмыҫҡалар — донъялағы иң боронғо бөжәктәр. Улар 100 млн йыл элек барлыҡҡа килгән. Бөгөнгө көндә ҡырмыҫҡалар Исландия, Гренландия һәм Антарктидала ғына юҡ.

Ер йөҙөндә ҡырмыҫҡаларҙың 10 меңгә яҡын төрө иҫәпләнә. Улар ҙурлыҡтары буйынса ла айырыла: ерән урман ҡырмыҫҡалары бик эре, ә ҡара ҡырмыҫҡалар ваҡ ҡына була. Ҡырмыҫҡаларҙың йәшәү рәүеше кешеләрҙекенә оҡшаған. Иләүҙә йомортҡа һалған бер генә инә ҡырмыҫҡа («батшабикә») була. Ҡалған ҡырмыҫҡалар эшселәргә, төҙөүселәргә, һаҡсыларға, фуражирҙарға (аҙыҡ табыусылар) бүленә.

Ҡырмыҫҡалар һәр ваҡыт үҙ ояһына юлды таба ала, сөнки улар үҙҙәре йөрөгән һуҡмаҡта махсус еҫ ҡалдыра. Иләүҙә закон ҡаты: әгәр ҡырмыҫҡа бер нәмә лә эшләмәһә, ул иләүҙән ҡыуыла.

Бөжәктәр тормошо тураһында мәғлүмәт әҙерлә.

**4.** Йомаҡты уҡы, яуабын тап.

Йылан түгел — саға,
Ҡош түгел — оса.

Это интересно

Бабочки пробуют пищу, стоя на ней. Это потому, что их датчики вкуса находятся в ногах.

Некоторые бабочки никогда не едят, так как они не имеют рта. Они живут на энергии, которую они накопили в виде гусениц.

Бабочки имеют сложные глаза: каждый глаз состоит из около 6 000 крошечных частей, называемых линзами.

http://www.gtalk.kz/green-channel

**күреү** — видеть
**һиҙеү** — чувствовать

**ҡурсаҡ** — (зд.) куколка

## 41 Һауа торошон белеү ниңә кәрәк?
### Рәүеш

**1.** Һүрәткә ҡарап, һорауҙарға яуап бир.



1. Ниндәй бөжәктәрҙе беләһең?
2. Бөжәктәр ҡышҡа нисек әҙерләнә?
3. Күбәләктәр тураһында нимә беләһең?

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ һәм әңгәмә ҡороғоҙ.

— Елена Ивановна, һауа торошоноң ниндәй булыуын ҡайҙан беләләр?

— Күп ерҙәрҙә метеорологик станциялар (метеостанциялар) эшләй. Унда ғалимдар һауа торошон күҙәтә. Метеорология — ул һауа торошон өйрәнә торған фән.

— Һауа торошон нисек итеп күҙәтәләр?

— Бының өсөн һауа шарҙары — зондтар ҡулланалар. Метеорологик самолёттар, диңгеҙ караптары, ә йыһанда

метеоспутниктар эшләй. Һауа торошон бер нисә көнгә йә аҙнаға алдан фаразлайҙар.

— Рәхмәт. Бөтәһе лә аңлашылды.

**3.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  аяҙ |  болотло |  ямғырлы |
|  ел |  йәйғор |  томан |

Т **4.** Тексты уҡығыҙ, исем бирегеҙ.

Иң күп ҡар февралдә яуа. Был айҙа ҡаты һыуыҡтар ҙа, улар араһында епшек көндәр ҙә була. Мышылар, ҡоралайҙар аҙыҡ эҙләп алыҫ ара үтә. Һоро айыуҙарҙың өңдәрендә балалары тыуа. Февраль айында һыу йылына төшә, балыҡ һәйбәт ҡаба башлай. 15 февралдә ҡар яуһа, яҙ һуңлап килә, һыуыҡ була. Календарь буйынса февраль — ҡыш аҙағы, әммә беҙҙең яҡтарҙа мартта ла әле һыуыҡ.

(Евгений Кучеровтан)

Текстан һынамышты табып, эш дәфтәренә яҙ. Тағы ла ниндәй һынамыштар беләһең?

**ел** — ветер
**йәйғор** — радуга
**ямғыр** — дождь
**аяҙ** — ясный (-ая, -ое), безоблачный (-ая, -ое)
**болотло** — пасмурный (-ая, -ое)
**томан** — туман

**күҙәтә** — наблюдает
**диңгеҙ караптары** — морские суда
**фән** — наука
**епшек көн** — слякотный день
**ара** — расстояние
**ҡулланалар** — используют

Это интересно

**11 января** — Всероссийский день заповедников и национальных парков
**22 марта** — Всемирный день водных ресурсов
**1 апреля** — Международный день птиц
**22 апреля** — Международный день Матери-Земли
**5 июня** — Всемирный день окружающей среды
**4 октября** — Международный день защиты животных
**30 ноября** — Всемирный день домашних животных

## 42 Һауа торошон белеү ниңә кәрәк?

## Рәүеш

A **1.** Тексты тыңла. Бөгөнгө һауа торошо тураһында һөйлә.

Һауа торошо — ул һауа температураһы, көндөң аяҙлы-болотло булыуы, яуым-төшөм, ел йүнәлеше. Һауа торошона тағы ла йәшен, томан, йәйғор кеүек тәбиғәт күренештәрен дә өҫтәргә була.

Синоптиктар һауа торошо тураһында алдан мәғлүмәт әҙерләй.

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, һөйләргә өйрәнегеҙ.

— Өләсәй, һин ҡоштарға ҡарап, һауа торошон белеп була, тигән инең.



— Эйе, улым. Әгәр турғай һәм сәүкәләр һауала өйрөлһә — ҡар яуа. Улар ергә төшһә — көн йылыта. Был ҡоштар ағас башына ҡунһа, һыуыҡ була. Ағастың аҫҡы ботаҡтарына ултырһалар, ел, буран буласаҡ.

— Өләсәй, төтөн мөрйәнән тура сыҡһа, һыуыҡ була, тиҙәр. Дөрөҫмө?

— Дөрөҫ, улым.

**3.** Йомаҡтарҙы сис. **Ҡасан?** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе тап.

Яҙын кейенә, көҙөн сисенә.
Йәйен — урманда батша, ҡышын — ҡарҙан да аҫта.
Көндөҙ йоҡлай, төнөн илай.
Йәйен һоро, ҡышын аҡ, уға шулай яҡшыраҡ.

**сәүкә** — галка
**тура** — прямо
**йәшен** — гроза, молния

**өйрөлә** — крутится, кружится
**яҡшыраҡ** — лучше
**һоро** — серый (-ая, -ое)
**батша** — царь

## 43 Киләсәктә тәбиғәттә үҙгәрештәр булырмы?
## Рәүеш

**А** **1.** Тексты тыңла.

Кешеләргә һауа торошон алдан белеү кәрәк. Өйҙән сыҡҡанда беҙ көндөң ниндәй икәнлеген белеп сығабыҙ.

Төрлө мәғлүмәттәрҙе тикшергәндән һуң, дежур синоптик һауа торошон билдәләй. Күп йылдар алып барылған күҙәтеүҙәргә таянып, метеоүҙәк айға, миҙгелгә көн торошо тураһында мәғлүмәт әҙерләй.

(«Аманат» журналынан)

**Т** **2.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ, әңгәмә ойоштороғоҙ.

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| марал | махаон | һоро торна |

1. Нимә ул Ҡыҙыл китап?

2. Ҡыҙыл китапҡа ингән ниндәй йәнлектәрҙе, ҡоштарҙы беләһегеҙ?

3. Һеҙ уларҙы нисек һаҡлайһығыҙ?

4. Нисек уйлайһығыҙ, тәбиғәт ниңә үҙгәрә?

**3.** Тексты уҡы. Һүҙлектәр ҡулланып, башҡортсаға тәржемә ит.

Природа Башкортостана очень красивая. Эту красоту надо беречь.

Во время экскурсий, прогулок в лесу нельзя шуметь, пугать животных, птиц. Нельзя разорять муравейники, гнёзда птиц, жилища зверей.

В лесу нельзя ломать деревья, рвать цветы. Природа — наш второй дом.

П **4.** Башҡортостандың тәбиғәт ҡурсаулыҡтарын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Картанан эҙләп табығыҙ.

Это интересно

В последнее время всё чаще можно услышать о глобальном потеплении, таянии ледников, озоновых дырах и других изменениях в природе.

Чем вызваны такие изменения? Этот процесс происходит в результате увеличения в атмосфере Земли вредных парниковых газов. Загрязнённый воздух задерживает тёплые солнечные лучи в атмосфере, что и приводит к росту температуры.

http://kratko-po-faktu.ru/priroda

**һаҡларға кәрәк** — надо беречь
**шауларға ярамай** — нельзя шуметь
**ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙырырға ярамай** — нельзя разорять муравейники

**ҡырмыҫҡа ояһы** — муравейник
**йәнлектәрҙең өңдәре** — жилища зверей

## 44 Киләсәктә тәбиғәттә үҙгәрештәр буламы?
## Рәүеш

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Һәр кешенең тәбиғәтте һаҡлау мөмкинлеге бар.

Беҙ яҙын, көҙөн ағастар ултыртабыҙ. Ағастар еребеҙҙең һауаһын таҙарта. Ҡыш көнө ҡоштарға тағараҡтар эшләйбеҙ. Унда ем һалабыҙ.

Йәй көнө тәбиғәткә сыҡҡанда ағастарҙы һындырмайбыҙ, ял иткән ерҙә сүп-сар ҡалдырмайбыҙ. Усаҡ утын һүндереп, тупраҡ менән күмеп китәбеҙ.

Тәбиғәтте үҙебеҙ һаҡлайбыҙ, сөнки беҙ ошо ерҙә йәшәйбеҙ.

1. Тәбиғәтте һаҡлау өсөн һин нимәләр эшләнең?
2. Нисек уйлайһың, киләсәктә тәбиғәттә үҙгәрештәр буламы?

**2.** Тексты уҡы, һорауҙар төҙө. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәргә һорау ҡуй.

Тәбиғәте матур булғанға, Башҡортостанды «Икенсе Швейцария» тип әйтәләр. Матур тәбиғәтте һаҡлай белергә лә кәрәк. **Яҙын да, йәйен дә, көҙөн дә** тәбиғәткә зыян килтереүселәр күп. Ял итеүселәр күпләп сүп ҡалдыра, янғын сығара.

Ерҙәге ҡағыҙ ике йылда серей. Полиэтилен бөтөнләй серемәй, быяла утыҙ йылға яҡын ерҙә ята. Шуға күрә сәйәхәткә сыҡҡанда йөрөгән ерҙе сүпләмәҫкә кәрәк.

(«Мәктәп календары»нан)

**П** **3.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ.

— Өләсәй, Нардуған байрамы тураһында һөйлә әле.

— Йәйге Нардуған (Аяу байрамы) 25 июндән 5 июлгә тиклем үткәрелә. Аяу байрамы тәбиғәткә аяулы, һаҡсыл булыу тигәнде аңлата. Был осорҙа балыҡ тоторға, ағас ҡырҡырға, һунар итергә рөхсәт ителмәй.

— Аңланым, өләсәй. Был ваҡытта ҡоштар бала сығара.

— Эйе, улым. Байрамда төрлө уйындар уйнайҙар, матур теләктәр әйтәләр.



**ҡағыҙ** — бумага
**ял итеү** — отдыхать

**сүп** — мусор
**янғын** — пожар
**быяла** — стекло
**серей** — гниёт
**бөтөнләй** — совсем
**рөхсәт ителмәй** — не разрешается
**осор** — время, период

# 45 Минең тормошомдағы ҡыҙыҡлы хәлдәр

## Ҡылым

А **1.** Һынамыштарҙы тыңла.

1. Ҡырмыҫҡа иләүе йәнләнһә, көн яҡшырыр. 2. Иртәнге томан өҫкә күтәрелһә — яуынға, ергә төшөп ятһа — аяҙға. 3. Иртән ҡуйы томан төшөп, ҡояш сығыуға тиҙ генә таралып бөтһә, һауа торошо оҙаҡ аяҙ булыр.

**2.** Яңы һүҙбәйләнештәр менән таныш, бирелгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө.



ҡыҙыҡлы хәлдәр



көлкөлө хәлдәр



күңелһеҙ хәлдәр

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** булды, һөйләне, күрҙем.

! Ҡылымдың юҡлыҡ формаһы **-ма/-мә** аффикстары ярҙамында бирелә. Сағыштыр: һатып ал**ма** — **не** покупай, аҡсаны тотон**ма** — деньги **не** трать.

Т **3.** Тексты уҡығыҙ, һорауға яуап бирегеҙ.

## Троллейбуста

Троллейбус туҡталышында бер ҡыҙ баҫып тора. Бер ҡулына бәләкәй генә төргәк, икенсеһенә сәскә гөлләмәһе тотҡан.

Троллейбусты күп кешеләр көтә. Бына троллейбус килеп туҡтаны. Башҡалар менән бергә Рауза ла вагонға инде. Шул арала кондукторҙың тауышы ишетелде:

— Пассажирҙар, билет алығыҙ!

Рауза ҡулын кеҫәһенә тыҡты... һәм ҡаушап ҡалды.

— Апай, минең аҡсам юҡ, — тине ул. — Аҡсам бөткәнен һиҙмәй ҡалғанмын.

— Ҡайҙа тиклем бараһың? — тип һораны кондуктор.

— Ҡала ситендәге дауаханаға. Наташа янына. Ул ауырый. Беҙ бергә уҡыйбыҙ.

Бер ағай кондукторға аҡса һондо. Кондуктор ҡыҙға билет йыртып бирҙе.

(А. Әхмәтовтан)

Был текст ниндәй хәл тураһында?

**ҡыҙыҡлы хәл** — интересный случай
**көлкөлө хәл** — забавный случай
**күңелһеҙ хәл** — печальный случай
**булды** — был
**һөйләне** — рассказал (-а)
**күрҙем** — увидел (-а)

**туҡталыш** — остановка
**төргәк** — свёрток
**һиҙмәй ҡалғанмын** — не заметила
**һондо** — протянул
**ҡала ситe** — окраина города
**ҡаушап ҡалды** — растерялась

# 46 Минең тормошомдағы ҡыҙыҡлы хәлдәр

## Ҡылым

**А** **1.** Тексты тыңла.

Класташым Кристина Чехияға уҡырға китте. Чехияла уҡыу беҙҙекенән айырыла икән. Унда йәйге каникулдар 2 ай дауам итә. Белем биш баллы система буйынса баһалана: «биш» — иң насар, ә «бер» иң яҡшы билдә һанала. Чехияла бер уҡытыусы бер нисә предметты уҡыта. Мәҫәлән, математика һәм физкультуранан бер уҡытыусы булһа, чех телен һәм химияны бер уҡытыусы өйрәтә.

**П** **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, үҙгәртеп төҙөгөҙ.

— Улым, һин ниндәй фильмдар ҡарарға яратаһың?

— Мин балалар тураһында фильмдар яратам. Айнур Асҡаровтың «Еңмеш» фильмы оҡшай.

— Ә һиңә мажаралы фильмдар оҡшаймы? Робинзон Крузо тураһында ҡарарға яратаһыңмы?

— Эйе, уның китабын да уҡыным. Уның авторы Даниэль Дефо. Ул инглиз яҙыусыһы.

**3.** Әкиәтте уҡы. Йөкмәткеһен һөйлә.

### Ҡарға

Борон заманда бер бай йәшәгән, ти. Һалдырған, ти, бик ҙур йорт. Ямғыр үтмәһен тип, йорттоң ҡыйығын ыҫмала менән буятып ҡуйған, ти.

Ҡыйыҡҡа бер ҡарға килеп ҡунған. Килеп тә ҡунған, ҡойроғо ыҫмалаға йәбешкән дә ҡуйған. Ҡойроғон ысҡындырам тип, ҡарға алға эйелгән. Ҡойроҡ ысҡынған, ләкин суҡышы йәбешкән. Суҡышын алһа, ҡойроҡ йәбешә, ҡойроғон алһа, суҡышы йәбешә...

Ҡарға ҡасан суҡышын да, ҡойроғон да ала — шул ваҡытта әкиәттең дауамын һөйләрмен.

(Башҡорт халыҡ ижадынан)

**класташ** — одноклассник
**ҡарарға яратам** — люблю смотреть
**ҡарға** — ворона

**беҙҙекенән** — от нашего
**яҙыусы** — писатель
**ыҫмала** — смола
**йәбешә** — прилипает
**эйелгән** — наклонилась

## 47 Мажаралар илендә
## Ҡылым

**1.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир. Үҙең дә 2 һорау төҙө.

### Искәндәрҙе кем уятты?

Искәндәр әсәһенең иртән:

— Балаҡайым, тор инде! — тигән яғымлы тауышына уянып китте.

— Рәхмәт, әсәй! Хәйерле иртә!

— Рәхмәтеңде һандуғасҡа әйт. Ул мине иртүк һайрап уятты.

Искәндәр йырсы ҡошҡа өндәште:

— Рәхмәт, һандуғас! Һин әсәйемде һайрап уятҡанһың бит.

— Матур теләктәреңде йылғаға әйт! Ул мине йырлап уятты.

Ә йылға елгә рәхмәт әйтергә ҡушты. Ел Искәндәрҙе болонға ебәрҙе. Болондағы сәскәләр, ҡояшҡа рәхмәт әйт, тинеләр. Улар ҡояш нурҙарынан матурлыҡ алалар икән. Искәндәр ҡояш артынан китте. Ҡояш — күктән, Искәндәр ерҙән бара. Искәндәр ҡояшҡа ҡасан етер? Быны бер кем дә белмәй.

(Факиһа Туғыҙбаеванан)

1. Искәндәр кемдәргә рәхмәт әйтә?
2. Һандуғас, сәскәләр, йылға, ҡояш кемдәрҙе уятҡан?
3. Искәндәрҙе кем уятҡан булып сыға?

**2.** Һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙө. Был әкиәт һиңә танышмы? Уның авторы кем?



Ни өсөн Буратино төрлө мажараларға осрай?

**А** **3.** Тексты тыңла.

Нина Ивановна рус әҙәбиәтенән Евгений Велтистовтың «Электроник мажаралары» китабын уҡырға ҡушты. Фәрит китап яратмай, шуға ул «Электроник мажаралары»ның киноһын ғына ҡараны. Контроль эште малай «2» билдәһенә яҙҙы. Кино менән китап айырыла икән шул.

**күктән** — по небу
**ерҙән** — по земле
**матурлыҡ** — красота

**уятты** — разбудил (-а)
**яғымлы тауыш** — нежный голос

## 48 Минең иң ҙур хыялым
## Ҡылым

**А** **1.** Тексты тыңла.

Мин тормошомдо телефонһыҙ күҙ алдына ла килтермәйем. Телефон аралашыу, Интернеттан мәғлүмәт алыу өсөн кәрәк. Минең был телефоным насар түгел: төҫлө дисплей, полифония. Шулай ҙа мин донъя лидеры «Nokia» маркалы, фотоаппараты ла, мини видеоһы ла булған кеҫә телефоны тураһында хыялланам.

(Л. Моталованан)

**2.** Һөйләмдәрҙе уҡы, тәржемә ит. Һорауға яуап бир.

### Балаларҙың хыялдары

1. Сәлимдең хыялы — ракетала осоу.
2. Аликтың хыялы — бөтә Ер шарын велосипедта урап сығыу.

3. Коляның хыялы — парапланда осорға өйрәнеү.

4. Ленаның хыялы — диңгеҙ төбөндәге коралл утрауҙарын күреү.

5. Антондың хыялы — космос карабында сит планетаға сәйәхәт итеү.

6. Әлиәнең хыялы — уйынсыҡтар фабрикаһын асыу.

7. Айнурҙың хыялы — бысранмай торған кейем уйлап табыу.

Ә һинең хыялың бармы?

!

Ҡылым зат менән үҙгәрә:

| | |
|---|---|
| **мин кейенәм** — я одеваюсь | **беҙ кейенәбеҙ** — мы одеваемся |
| **һин кейенәһең** — ты одеваешься | **һеҙ кейенәһегеҙ** — вы одеваетесь |
| **ул кейенә** — он (она) одевается | **улар кейенәләр** — они одеваются |

Т **3.** Тексты уҡығыҙ, әңгәмә ҡороғоҙ.

## Замир президент була

Зәбир, Зәйтүнгөл, Зәки менән Замир бәхәсләшә.

Зәбир:

— Мин журналист булам, улар күп сәйәхәт итә, — ти.

— Ә мин зоолог булам, хайуандарҙы яратам, — ти Зәйтүнгөл.

Уларға Зәки:

— Тапҡанһың кем булырға! Хайуандар яратһаң, бар ана зоопаркка, жирафы ла, зебраһы ла бар. Бына циркта жонглёр булып эшләһәң икән! Вәт, исмаһам, ҡыҙыҡ!

Дуҫтарын тыңлап ултырған Замир:

— Ә мин президент булам, — тине. Бөтәһе лә аптырап китте.

(Зөлфиә Кускилдинанан)

**хыял** — мечта
**хыяллана** — мечтает
**бәхәсләшә** — спорит
**маҡсат ҡуйыу** — ставить цель
**маҡсатҡа ирешеү** — добиться цели

**утрау** — остров
**осорға** — летать
**аптырап китте** — удивились
**вәт ҡыҙыҡ** — вот интересно

## 49 Минең кумирҙарым
## Ҡылым

А **1.** Тексты тыңла.

Мин роботтар төҙөү түңәрәгенә йөрөйөм. Үҫкәс, инженер-конструктор булырға, биороботтар төҙөргә хыялланам. Атай-әсәй эштә булғанда, роботтар балалар менән уйнар, әкиәттәр уҡыр, дәрес әҙерләргә ярҙам итер ине.

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш, һөйләмдәр төҙө.

**Өлгө:** Мин йырсы Радик Юлъяҡшин менән һоҡланам.

**һоҡланам**
**ғорурланам**
**табынам**
**оҡшарға тырышам**

П **3.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.



— Әҙилә, һинең кумирың бармы?

— Бар. Мин Тамара Танһыҡҡужина менән һоҡланам.

— Ә кем ул?

— Шашка буйынса 5 тапҡыр донъя чемпионы. Ә һинең кумирың кем?

— Ағайым. Ул йәй көнө һыуҙа батыусы ике малайҙы ҡотҡарҙы. Батырлығы өсөн уға миҙал бирелде. Мин үҙемдең ағайым менән ғорурланам.

Это интересно

Кумир — предмет слепого поклонения. Именно в таком значении слово «кумир» общеизвестно, однако это его переносное значение. Буквально кумир — это статуя, изображающая языческие божества.

Современный мир полон кумиров. Кумиры занимают почётные места на сценах театров, концертных залов, на спортивных аренах. Кумирами для некоторых сегодня становятся певцы, спортсмены, политики, журналисты. Постепенно на них начинают массово равняться, стараются подражать им, и это становится «модным». При этом копируется их стиль поведения, манера одеваться или общаться.

Людей, подражающих своему кумиру и являющихся поклонниками какой-нибудь спортивной команды, артиста, политика, часто называют фанатами.

http://kto-takie-kumiry.html

**мәғлүмәт** — информация
**һоҡланам** — восхищаюсь
**ғорурланам** — горжусь
**табынам** — поклоняюсь
**оҡшарға тырышам** — подражаю

**үҫкәс** — когда вырасту
**һыуҙа батыусы** — утопающий
**ҡотҡарҙы** — спас
**ярҙам итер ине** — помог бы

## 50 Минең кумирҙарым
## Ҡылым

А **1.** Тексты тыңла.

Минең кумирым — Эльбрус Ниғмәтуллин. Ул пауэрлифтинг һәм армрестлинг буйынса спорт мастеры, 4 тапҡыр Рәсәйҙең иң көслө кешеһе, 2005 йылда «Донъяның иң көслө кешеһе» исемен ала. Локомотивҡа тағылған 4 вагонды арҡан менән тартып бер нисә метр алып бара. Уның рекордтары Гиннесс китабына индерелгән. Эльбрус ағай «Мин үлмәнем, башҡорттар» фильмында Салауат Юлаев ролен башҡара.

П **2.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Башҡортостан — бик күп билдәле спортсыларҙың тыуған ере.

Рима Баталова — 18 тапҡыр донъя чемпионы, 43 тапҡыр Европа чемпионы, 18 тапҡыр йүгереү буйынса донъя рекордсменкаһы.

Ғабдрахман Ҡадыров — боҙҙа мотоуҙыш буйынса 6 тапҡыр донъя чемпионы.

Игорь Кравчук — хоккейсы, ике тапҡыр Олимпия уйындары еңеүсеһе, донъя һәм Европа чемпионы.

Максим Чудов — 3 тапҡыр ҡышҡы биатлон, 3 тапҡыр йәйге биатлон буйынса донъя чемпионы.

1. Был спортсылар тураһында нимә беләһең?
2. Һинең кумирҙарың араһында спортсылар бармы?

**3.** Фотоларҙы ҡара, был кешеләр — миллиондарҙың кумиры. Улар нимә менән билдәле?


Рудольф Нуриев


Эрнст Мулдашев


Владимир Спиваков


Асҡар Абдразаҡов

П **4.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

— Һин Мостай Кәримде беләһеңме?
— Юҡ. Кем ул?
— Ул бик шәп яҙыусы.
— Ниндәй китабын уҡының?
— «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесын. Ныҡ оҡшаны, һин дә уҡы.
— Ярай, уҡырмын.

**хоккейсы** — хоккеист
**йәйге биатлон** — летний биатлон

**өс тапҡыр** — (зд.) трёхкратный
**мотоуҙыш** — мотогонки

51

# Телмәр үҫтереү

## Ҡылым












## Һатып алырға өйрәнәм

# 52 Минең бюджет

## Ҡылым

**1.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.



аҡса



һум




тин

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

— Ура! Миңә әсәйем бөгөн 200 һум аҡса бирә.

— Ни эшләп, Камил?

— Мин математика һәм физкультуранан ике «5» алдым. Һәр «5» өсөн әсәйем 100 һум аҡса бирә.

— Һин ул аҡсаны ни эшләтәһең?

— Көн дә чипсы, шоколад алып ашайым. Ә һин нимә эшләр инең?

— Мин, аҡсаны йыйып, әсәйемдең тыуған көнөнә бүләк алыр инем.

1. Камилдың әсәһе дөрөҫ эшләйме?
2. Һин аҡсаңды нисек тотонор инең?
3. Балалар нисек аҡса эшләй ала?

**3.** Тексты уҡы, һорауға яуап бир.

## Бәхет

Уҡыусы уҡытыусынан һорай:

— Бәхет аҡсала түгел, тип әйтәләр. Был дөрөҫмө?

— Эйе, дөрөҫ. Аҡсаға карауат алып була, тик йоҡоно түгел; аҙыҡ-түлек алып була, тик аппетитты түгел; дарыу алып була, тик һаулыҡты түгел; китап алып була, тик аҡылды түгел. Шулай булғас, бәхет аҡсала түгелдер.

(«Мәктәп календары»нан)

Һин нисек уйлайһың, бәхет аҡсаламы?

### Это интересно

Название «копейка» пришло к нам со времён правления Ивана Грозного, когда были отпечатаны монеты с его портретом и копьём, которые он повелел называть «копейными деньгами».

Раньше не было бумажных купюр, были только металлические деньги. Во времена Ломоносова произошёл интересный факт: когда ему дали премию в 2000 рублей, то общий вес этой премии составил почти тонну, поэтому ему пришлось нанять телегу с рабочими, чтобы увезти свои деньги домой.

http://pikabu.ru/ 15_interesnyikh_faktov_o _dengakh

**аҡса** — деньги
**һум** — рубль
**тин** — копейка

**бәхет** — счастье
**аҡыл** — ум

# 53 Минең бюджет
## Ҡылым

А **1.** Шаярыуҙы тыңла.




— Атай, мин һиңә 5 мең һум аҡса бирәм, ә һин көндәлекте һорама.

— Көндәлегеңде бир!

— 10 мең.

— Көндәлегеңде бир!

— 100 мең.

— Көндәлегеңде бир!

— Атай, мин һиңә 100 мең бирҙем, ә һиңә көндәлек кәрәк. Мә, ҡара, математиканан «бишле»!

(«Мәктәп календары»нан)

**2.** Һүҙбәйләнештәрҙе һүҙлек ярҙамында тәржемә ит. Рус телендә **аҡса** һүҙе менән ниндәй фразеологизмдар бар?

аҡса эшләү, аҡса туҙҙырыу, аҡса йыйыу, аҡса ҡоло булыу, **аҡса** иҫәп ярата, аҡсаның күҙе юҡ

!

Ҡылым үткән, хәҙерге һәм киләсәк заманда үҙгәрә: эшлә**не**, эшлә**гән** — эшлә**й** — эшлә**р**, эшлә**йәсәк**.

Үткән һәм киләсәк замандарҙың ике формаһы бар: уҡы**ны**, уҡы**ған** — уҡы**р**, уҡы**ясаҡ**.

П **3.** Мәҡәлде уҡығыҙ, мәғәнәһен аңлатығыҙ.

100 һум аҡсаң булғансы, 100 дуҫың булһын.

### Это интересно

В России свои первые деньги были введены сразу после принятия христианства в X веке. До этого в стране в качестве платёжного средства ходили иностранные монеты: из Восточной Европы и стран Ближнего Востока. России срочно нужна была своя национальная валюта.

В IX веке на Руси за деньги считали шкуры животных, камни, пищу. Но самым ценным товаром на Руси была русская пушнина. Наш лес был богат различными животными. Это привлекло торговцев с Востока, особенно из Византийской империи, где уже чеканились монеты. Так и появились деньги на Руси.

http://vse-dengy.ru

**4.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

## Эшләп табылған бер һум

(грузин халыҡ әкиәте)

Бер бабайҙың ялҡау улы булған. Бабай ҡартайған, бер көн улын саҡырып алған:

— Улым, мин һәр ваҡыт аҡса эшләнем, ә һин бер һум аҡса ла тапҡаның юҡ, — тигән.

— Бер һум аҡса табыу еңел ул! — тигән улы.

— Бер һум эшләп тапһаң, донъямды һиңә мираҫ итеп ҡалдырам, — тигән атаһы.

Әсәһе улын йәлләп, уға бер һум аҡса тотторған. Малай аҡсаны атаһына биргән. Атаһы аҡсаны утҡа ташлаған. Малай бер нәмә лә әйтмәгән. Икенсе көндө лә шундай хәл ҡабатланған.

Өсөнсө көндө әсәһе улына аҡса бирмәгән. Аҙна буйы малай тинләп аҡса йыйған һәм атаһына бер һум аҡса алып ҡайтҡан. Атаһы аҡсаны тағы утҡа ташлаған. Малай илап

ебәргән, аҡсаны уттан алырға тырышҡан. Шунда ғына бабай улына ышанған һәм уға мираҫ ҡалдырған.

1. Ни өсөн бабай улын эшләтергә булған?
2. Әсәһе дөрөҫ эшләгәнме?
3. Ни өсөн бабай аҡсаларҙы утҡа ташлаған?

**йыйыу** — собирать
**туҙҙырыу** — (зд.) тратить
**булыу** — быть
**эшләү** — работать, зарабатывать

**мираҫ** — наследство
**ут** — огонь
**ташлаған** — бросил

## 54 Мин кейем һатып алам
## Ҡылым

**1.** Һүрәттәге кейемдәрҙең атамаларын хәтереңә төшөр. Ниндәй кейем атамалары башҡорт теленә тәржемә ителмәй? Ни өсөн?



А **2.** Тексты тыңла.

— Әсәй, аҡса бир әле!
— Нимәгә?

— Урамда ҡысҡырып торған кешегә бирәм.
— Ул нимә тип ҡысҡыра?
— Туңдырма алығыҙ, тип.

(«Мәктәп календары»нан)

**3.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| үлсәм(-е) | буй(-ы) | хаҡ(-ы) |

П **4.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

## Магазинда

— Һаумыһығыҙ, миңә салбар кәрәк ине.
— Һаумыһығыҙ. Һеҙгә классик салбармы әллә джинсымы?
— Джинсы.
— Буйың күпме?
— 152 см.
— Үлсәмең 29-мы?
— Эйе.
— Бына, кейеп ҡара әле.
— Миңә тап-таман. Хаҡы күпме?
— 1500 һум.
— Бына аҡса, мин алам.
— Һау булығыҙ.
— Һау булығыҙ.

### Это интересно

Во времена Ивана Грозного на Руси одним из знаков достоинства вельможи являлся расшитый воротник, который назывался «шиворот». Если же какой-нибудь боярин подвергался царскому гневу и опале, его по обыкновению сажали на тощую клячу спиной вперёд, предварительно вывернув одежду наизнанку. С тех пор закрепилось выражение «шиворот-навыворот» в значении «наоборот, неправильно».

http://muzey-factov.ru/tag/wear

**кейеп ҡара** — примерь
**буй** — рост
**үлсәм** — размер
**хаҡ** — цена

**салбар** — брюки
**тап-таман** — (зд.) как раз

## 55 Мин кейем һатып алам
## Ҡылым

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Тәтәй күлдәк ҡайҙа үҫә?

Әлфиәнең 5 йәшенә атаһы ҡурсаҡ алып бирҙе. Әлфиәгә ҡурсаҡтың күлдәге оҡшаны.

— Атай, ошондай күлдәктәр ҡайҙа үҫә икән? — тип һораны ҡыҙ.

— Тәтәй күлдәктәр ҙә ерҙә үҫә, ҡыҙым, — тине атаһы.

— Икмәк һымаҡмы?

— Эйе.

Атаһы эшкә китте. Әлфиә тәтәй күлдәкте баҡсалағы соҡорға күмде, һыу һипте.

(Гөлнур Яҡупованан)

1. «Күлдәктәр ҙә ерҙә үҫә» тигәнде нисек аңлайһың?
2. Әлфиә дөрөҫ эшләнеме?
3. Нисек уйлайһың, хикәйә нисек тамамлана икән?

**2.** Һүрәттәге аяҡ кейемдәренең атамаларын хәтереңә төшөр. Ниндәй аяҡ кейеме атамалары башҡорт теленә тәржемә ителмәй? Ни өсөн?



**3.** Яңы һүҙҙәр менән таныш, һөйләмдәр төҙө.

**Өлгө:** Миңә был салбар оҡшай.

**кейә**
**килешә**
**оҡшай**
**таман**

**П** **4.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Әсәй, минең физкультура дәресендә кроссовкаларым йыртылды.

— Мин бөгөн эштә, шәмбе көн магазинға барырбыҙ.

— Әсәй, һин аҡса бир, мин үҙем алам.

— Ярай, тик чек менән коробкаһын ташлама.

— Ни эшләп?

— Кроссовкалар ярамаһа йәки брак булһа, ике аҙна эсендә магазинға кире тапшырырға була.

— Ярай.

### Это интересно

Археологи пришли к выводу, что обувь появилась 26–30 тыс. лет тому назад. Первая обувь была кожаная, изготовленная с использованием древесной коры, камыша, папируса, лыка, соломы, пряжи и дерева.

В XIV веке в Европе длина туфель зависела от знатности. Высшему дворянству разрешали носить обувь на 3 см больше истинного размера. Дворяне вынуждены были привязывать туфли, чтобы не потерять их.

http://muzey-factov.ru

**кейә** — надевает
**килешә** — идёт, подходит, к лицу
**оҡшай** — нравится
**таман** — как раз, впору

**йыртылды** — порвались
**аҙна** — неделя
**тәтәй күлдәк** — красивое платье
**соҡор** — яма
**күмде** — закопала

## 56 Мин модалы кейем яратам
## Ҡылым

**А** **1.** Һүҙбәйләнештәрҙе тыңла, ниндәй әкиәт геройҙары һаналып киткәнен әйт.

аҡ халатлы бабай, бер туфлилы ҡыҙ, зәңгәр эшләпәле малай, ҡыҙыл күлдәкле малай, аҡ тунлы ҡыҙ менән ҡыҙыл тунлы бабай

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

Модалы кейем

уңайлы — сағыу — заманса

**П** **3.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

— Әҙилә, һин сығарылыш кисәһенә күлдәк алдыңмы?

— Юҡ. Әсәйем менән Интернеттан заказ эшләнек. Ә һин?

— Миңә йәкшәмбе көндө әсәйем күлдәк менән туфли һатып алды.

— Ниндәй төҫтә? Матурмы?

— Эйе, бик матур, аҡ төҫтә. Фотоһы бар. Күрһәтәйемме?

— О, бик модалы күлдәк бит.

1. Һин моданы нисек аңлайһың?
2. Модалы кейем яратаһыңмы?
3. Модалы кейем ниндәй булырға тейеш?

### Это интересно

Самая ранняя версия появления джинсов засвидетельствована в английских портовых книгах XVI века: в Великобританию из Генуи ввозили ткань, позже получившую название «деним», шили штаны и продавали их по всей Европе под названием «джейн» или «джин». Носили такие штаны только рабочие. В России джинсы впервые появились лишь в 1958 году.

**сағыу** — яркий (-ая, -ое)
**заманса** — современный (-ая, -ое)

**сығарылыш кисәһе** — выпускной вечер
**төҫ** — цвет
**Күрһәтәйемме?** — Показать?

## 57 Бүләк һайлайым
## Ҡылым

А **1.** Тексты тыңла.

Мода йыл да үҙгәреп тора. Элек джинсы салбарҙы эшселәр генә кейгән. Бөгөн джинсыны ата-әсәләр ҙә, олатай-өләсәйҙәр ҙә, балалар ҙа яратып кейә. Магазин кәштәләрендә джинсы салбарҙар ҙа, күлдәктәр ҙә, курткалар ҙа, пинжәктәр ҙә, юбкалар ҙа бар. Джинсынан хатта кеды һәм кроссовкалар тегәләр. Ул уңайлы ла, заманса ла.

(«Мәктәп календары»нан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

бүләк → һайлай (-ым) | һатып ала (-м) | бирә (-м), итә (-м)

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Әсәйемдең тыуған көнө

Бөгөн шатлыҡ, бөгөн байрам,
Әсәйем бөгөн тыуған.
Өләсәйем ҡоймаҡ ҡоя,
Йөҙҙәренә нур тулған.
Ағайым бүләк итергә
Ағас ҡумта яһаны.
Ә мин нимә бүләк итәм?
Нимә генә алаһы?
Буяуҙарымды алдым да
Ҡояш төшөрҙөм — һары.
Әсәйем дә ҡояш кеүек
Бирәү генә шул бары.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина)

Т **4.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

## Нимә бүләк итергә?

Ҡәҙерле кешеләрегеҙгә бүләк әҙерләгеҙ. Уның ҙуры-бәләкәйе булмай.

Бүләкте ысын йөрәктән изге теләктәр теләп бирергә кәрәк.

Ниндәй бүләк һайларға һуң? Яҡшы китап йә сувенир һатып алырға була, сәскәләр ҙә — бик матур бүләк. Әгәр бүләкте үҙ ҡулдарығыҙ менән эшләһәгеҙ, бигерәк тә яҡшы.

(«Мәктәп календары»нан)

1. Һин туғандарыңа бүләк алаһыңмы?
2. Нисек бүләк һайлайһың?
3. «Энә лә бүләк, дөйә лә бүләк» тигәнде нисек аңлайһың?
4. Үҙеңә ниндәй бүләк алыр инең?

**һайлай(-ым)** — выбирает, выбираю
**һатып ала(-м)** — покупает, покупаю
**бүләк итә(-м)** — дарит, дарю

**дөйә** — верблюд
**йөрәк** — сердце

## 58 Бүләк һайлайым
## Ҡылым

А **1.** Тексты тыңла.



Әсәйемдең тыуған көнө,
Бүләк эшләргә кәрәк.
Апайым менән икәүләп
Өйрәндек беҙ йыр-бүләк.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

П **2.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, үҙгәртеп төҙөгөҙ.

— Апай, әсәйемдең тыуған көнөнә нимә бүләк итәбеҙ?
— Әйҙә, матур открытка эшләйек.
— Мин Интернетта ҡулдан эшләнгән открыткалар күргәйнем. Ҡарайыҡмы?
— Эйе. Шунан материал һайларбыҙ.
— Теләктәребеҙҙе лә яҙабыҙмы, апай?
— Әлбиттә. Иң матур һүҙҙәрҙе һайлай тор.

**3.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

### Бүләк

Ғәлиә атаһы менән бергә газета уҡырға ярата. Нурғәли ағай «Йәншишмә» газетаһындағы бер хатты уҡыны. Уны Башҡортостандан ситтә йәшәүсе кескәй ҡыҙҙар яҙған.

Улар башҡорт телен насар беләләр икән. Башҡортса өйрәнергә теләйҙәр.

Ғәлиә атаһынан:

— Ниңә улар башҡортса насар белә икән? — тип һораны.

— Ҡыҙым, ул яҡта башҡортса өйрәтергә уҡытыусы ла, китаптар ҙа булмаған. Шуға улар русса ғына уҡығандар.

— Атай, һин алған китаптарҙы мин әллә ҡасан уҡып бөттөм. Шуларҙы ебәрәйек.

Бүләк ебәреүгә өс аҙна ваҡыт үтте. Бер көндө ишектә хат ташыусы апай күренде.

— Бына Ғәлиәгә алыҫтан посылка бар, — тине ул. Теге ҡыҙҙар ебәргәйне был бүләкте. Йәшниктә бик матур ҡурсаҡ һәм хат бар ине.

(«Йәншишмә» газетаһынан)

1. Хатта нимәләр яҙылған ине?
2. Ғәлиә нимә эшләне?
3. Ҡыҙҙарҙан ниндәй яуап килде?

**4.** Текстағы һорауға яуап бир.

Ике малай һәм бер ҡыҙ Нәйләгә 15 сәскә бүләк иткән. Малайҙарҙың берәүһе — 5, икенсеһе 3 сәскә биргән. Ҡыҙ нисә сәскә бүләк иткән?

**хат** — письмо
**өйрәнергә теләйҙәр** — желают изучить
**алыҫтан** — издалека

**Башҡортостандан ситтә** — за пределами Башкортостана
**русса ғына** — только по-русски
**йәшник** — ящик

59

## Телмәр үҫтереү

## Ҡылым




11:15

## Уҡыу өсөн материал

### Ҡыҙыл кәләпүш

(Ш. Перро)

**I**

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер ҡыҙыҡай. Уны әсәһе менән өләсәһе бик-бик яратҡан. Өләсәһе уға ҡыҙылдан матур кәләпүш тегеп кейҙергән. Ҡыҙыҡайға кәләпүше шул тиклем килешә икән, тора-бара бөтәһе лә уны Ҡыҙыл кәләпүш тип кенә йөрөтә башлаған.

Бер көндө әсәһе бәрәмәс бешергән, аҡ май бешкән дә Ҡыҙыл кәләпүшкә:

— Өләсәйең ауырып киткән. Уға бәрәмәс менән май алып бар, хәлен белеп ҡайт, — тигән.

Өләсәһе ҡара урман артындағы бер ауылда йәшәгән. Ҡыҙыл кәләпүш шунда уҡ юлға сыҡҡан.

**II**

Урман буйлап китеп барһа, уға бүре осраған. Ҡыҙыл кәләпүште бер генә ҡабып йотор ине лә, яҡында ағас ҡырҡыусылар йөрөй икән.

— Ҡайҙа китеп бараһың, Ҡыҙыл кәләпүш? — тип һораған, ти, бүре.

— Өләсәйемә, — тип яуап ҡайтарған Ҡыҙыл кәләпүш.

— Кәрзинеңдә нимә ул?

— Бәрәмәс менән май. Өләсәйем ауырып киткән, хәлен белергә барам.

— Өләсәйең ҡайҙа йәшәй һуң? — тип һораған бүре.

— Урмандан сыҡҡас та иң ситке өйҙә.

Ҡыҙыл кәләпүш бүреләрҙең яуыз булғанын белмәгән. Бөтәһен дә һөйләгән дә биргән, ти.

— Минең дә өләсәйеңдең хәлен белгем килә, — тигән бүре. — Әйҙә, ярышайыҡ. Кемебеҙ алданыраҡ барып етер икән?

## III

Хәйләкәр бүре иң ҡыҫҡа юлды һайлаған, ә Ҡыҙыл кәләпүште ырау юлдан ебәргән. Иң алдан бүре барып еткән, ти. Бына ул ишек шаҡыған. Туҡ-туҡ.

— Кем бар унда? — тип һораған өләсәй.

— Был мин, Ҡыҙыл кәләпүш, — тип яуаплаған бүре. — Һиңә бәрәмәс менән май килтерҙем.

— Бауҙы тарт, балаҡайым, — тигән өләсәй. — Ишек үҙе асылыр.

Бүре килеп ингән дә өләсәйҙе ашаған да ҡуйған. Шунан өләсәй кейемен кейенеп алған да уның урынына ятҡан.

## IV

Бына Ҡыҙыл кәләпүш тә килеп еткән. Туҡ-туҡ.

— Кем бар унда? — тип һораған бүре. Тик тауышы ғырылдап сыҡҡан. Ҡыҙыл кәләпүш өләсәһенең тамағы ауыртҡандыр тип уйлаған.

— Был мин, Ҡыҙыл кәләпүш, — тип яуаплаған. — Һиңә май менән бәрәмәс килтерҙем.

— Бауҙы тарт, балаҡайым, ишек үҙе асылыр, — тигән бүре.

Ҡыҙыл кәләпүш килеп инһә, өләсәһе түшәктә ята.

— Арығанһыңдыр инде, балаҡайым, — тигән бүре, — яныма ултырып тор.

— Өләсәй, өләсәй, — тигән Ҡыҙыл кәләпүш, — нишләп һинең ҡолағың шундай ҙур?
— Һине яҡшыраҡ ишетер өсөн, балаҡайым.
— Өләсәй, өләсәй, ә нишләп һинең күҙең шундай ҙур?
— Һине яҡшыраҡ күрер өсөн, балаҡайым.
— Өләсәй, өләсәй, ә нишләп һинең ҡулың шундай ҙур?
— Һине нығыраҡ ҡосаҡлар өсөн, балаҡайым.
— Өләсәй, өләсәй, ә нишләп һинең тешең шундай ҙур?
— Һине ашар өсөн, балаҡайым, — тигән дә бүре Ҡыҙыл кәләпүште йотҡан да ҡуйған.

## V

Шул ваҡыт өй эргәһенән ағас ҡырҡыусылар үтеп барған. Тауышты ишетеп, өйгә инһәләр, эсе күбәләй булып бүре ята икән.

— Ах һин, яуыз, — тип асыуланған улар. Эсен ярып ебәрһәләр, унан Ҡыҙыл кәләпүш менән өләсәһе имен-аман килеп сыҡҡан, ти.

Улар нык шатланған, ағас ҡырҡыусыларға мең рәхмәт әйткән. Күмәкләшеп сәй эскәндәр, май менән бәрәмәс ашағандар.

(З. Бураҡаева, Г. Ғиззәтуллина тәржемәһе)

**Ҡыҙыл кәләпүш** — Красная шапочка
**ауырып китеү** — заболеть
**хәл белеү** — проведать

**ағас ҡырҡыусылар** — лесорубы
**бәрәмәс** — ватрушка
**ҡабып йотор ине** — проглотил бы
**имен-аман килеп сыҡҡан** — вышли живыми и здоровыми

## Белемдең сиге юҡ

(югослав халыҡ әкиәте)

Борон-борон заманда бер Аҡыл эйәһе йәшәгән. Күпте күргән булған ул, шуға ла күпте белгән.

Ҡышҡы һалҡын кистә Аҡыл эйәһе усаҡ янында уйланып ултыра икән. Шул саҡ кемдер ишек шаҡыған. Күршелә йәшәүсе кескәй ҡыҙ ингән булған.

— Бабаҡай, — тигән ҡыҙ, — беҙҙең усаҡ һүнде, өс кенә киҫәк күмер бирмәҫһеңме?

— Бирәм, балаҡайым, — тигән Аҡыл эйәһе, — тик һин уны нисек алып сығырһың икән?

— Ус төбөмдә алып сығам, бабай, — тигән кескәй ҡыҙ.

Аҡыл эйәһе көлөп ебәргән:

— Һин нимә, балаҡайым, ҡулыңды яндыраһың бит!

— Борсолма, бабаҡай, яндырмам, — тигән ҡыҙ.

Ҡыҙ усаҡ янына килгән дә уның ситендәге һалҡын көлдө ҡалын итеп ус төбөнә йәйгән. Шунан һуң көл өҫтөнә утлы күмерҙәрҙе теҙгән. Ҡыҙ сығып киткәс, ҡарт Аҡыл эйәһе тәрән уйға сумған. Бер аҙ ултырғас, бармағын өҫкә күтәргән дә, үҙенә үҙе былай тигән:

— Кескәй генә ҡыҙҙан да нимәгәлер өйрәнергә була. Белемдең сиге юҡ.

(«Донъя халыҡтары әкиәттәре» китабынан)

**белем** — знание
**сик** — граница

**Аҡыл эйәһе** — Мудрец
**күмер** — уголь
**ус төбө** — ладошка
**көл** — зола

## Комһоҙлоҡ бәләһе

(венгр халыҡ әкиәте)

Ике айыу балаһы бер баш сыр тапҡан. Улар сырҙы бүлә алмай аптырап бөткән. Нисек һындырһалар ҙа сыр бер тигеҙ булмаҫ төҫлө күренгән уларға.

— Бирегеҙ, үҙем бүлеп бирәм, — тигән төлкө айыу балаларына һәм сырҙы икегә һындырған.

— Берәһе ҙур, икенсеһе бәләкәй! — тип ҡысҡырышҡан айыу балалары.

Төлкө уларҙы тынысландырған, хәҙер тигеҙләйем, йәнәһе. Ул сырҙың ҙур яғын бер аҙ тешләп алған. Хәҙер сырҙың теге яғы ҙурыраҡ күренгән. Айыу балалары, ризаһыҙлыҡ белдереп, тағы шаулашҡан.

Төлкө аптырап ҡалмаған. Сырҙың ҙурыраҡ тигән яғын тағы һындырып ҡапҡан. Сырҙың әле бер, әле икенсе яғын ашай-ашай төлкө сырҙан тамам туйған, ти. Ә баш ҙурлыҡ сырҙан тора-бара бәп-бәләкәй киҫәктәр генә ҡалған.

— Бәләкәй генә булһалар ҙа тигеҙҙәр! — тигән төлкө, шарҡылдап көлөп. — Ашағыҙ, тәмле булһын! — Шулай тигән дә сабып киткән. Айыу балалары ауыҙҙарын асып ҡарап ҡалғандар. Комһоҙланһаң, һәр ваҡыт шулай була ул.

(«Донъя халыҡтары әкиәттәре» китабынан)

**комһоҙлоҡ** — жадность
**бер тигеҙ** — одинаково

**аптырап бөткәндәр** — замучились
**тынысландырған** — успокоила
**ризаһыҙлыҡ** — несогласие
**киҫәк** — кусок
**ауыҙҙарын асып** — разинув рты

## Бутҡа көршәге

(бер туған Гриммдар)

Йәшәгән, ти, бер ҡыҙыҡай. Урманға eләккә барғанда бер әбейҙе осратҡан.

— Һаумы, ҡыҙыҡай, — тигән әбей, — миңә әҙерәк eләк бирһәңсе.

— Алығыҙ, инәй, — тигән ҡыҙыҡай.

Әбей eләк ашаған да:

— Һин мине eләк менән һыйланың, мин дә һиңә бер нәмә бүләк итәйем, — тигән. — Бына һиңә көршәк, уға: «Бер, ике, өс, бутҡа, беш!» — тип әйтеү ҙә етә, һәм ул тәмле бутҡа бешерә башлар. Аҙаҡ: «Бер, ике, өс, бутҡа, бешеүеңдән туҡта!» — тип әйтһәң, туҡтар, башҡа бешермәҫ.

— Рәхмәт, инәй, — тигән ҡыҙ һәм ҡайтып киткән.

Әсәһе был көршәккә бик шатланған. Бер ваҡыт ҡыҙыҡай урамға уйнарға сығып киткән. Әсәһе көршәккә: «Бер, ике, өс, бутҡа, беш!» — тигән. Көршәк бутҡа бешерә башлаған. Күп итеп бешергән ул. Әсәһе бер аҙ ашаған да туйған. Ә көршәк бешергән дә бешергән, бешергән дә бешергән. Уға тик: «Бер, ике, өс, бутҡа, бешеүеңдән туҡта! — тип әйтергә генә кәрәк булған, ә әсәһе был һүҙҙәрҙе онотҡан да ҡуйған, ти.

Бутҡа менән бөтә өй тулған, болдорға ағып киткән, урамға сыҡҡан, ә көршәк һаман бешергән дә бешергән. Әсәһе бик ныҡ ҡурҡҡан, ҡыҙ артынан урамға йүгереп сыҡҡан. Тик юл аша үтә алмай икән, эҫе бутҡа йылға булып ағып ята, ти. Ярай әле ҡыҙ өй тирәһендә генә йөрөгән булған. Урамда нимә булғанын күреп, тиҙ генә йүгереп ҡайтҡан. Көс-хәл менән болдорға менеп, ишекте асыу менән: «Бер, ике, өс, бутҡа, бешеүеңдән туҡта!» — тип ҡысҡырып ебәргән.

Көршәк бутҡа бешереүҙән туҡтаған. Ул бутҡаны шул тиклем күп бешергән, ти. Ауылдан ҡалаға барыусылар, бутҡа ашамайынса, юлдан үтә алмағандар. Тик бераү ҙә асыуланмаған, бик тәмле булған, ти, бутҡа.

(«Донъя халыҡтары әкиәттәре» китабынан)

**көршәк** — горшок
**бешерә** — варит

**болдор** — крыльцо
**йылға булып** — рекой

## Бөркөт менән сүллек

(ҡытай халыҡ әкиәте)

Алыҫта-алыҫта, Ҡытайҙың бер сүллегендә, яңғыҙ бөркөт йәшәгән. Тирә-яҡта шишмә лә, ҡыуаҡ та юҡ, бары ҡом да ҡом ғына, ти. Бер көндө бөркөт бейеккә осоп менгән дә тирә-яҡҡа күҙ ташлаған. Көнсығышта икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ, төньяҡта йәшел урмандар күренеп ятҡан. Көнбайышта йәйғорҙай киске шәфәҡ балҡыған. Көньяҡта йәм-йәшел болондар йәйрәп ятҡан. «Ә минең тыуған яғым йәмһеҙ. Мин бында ла йылғаларҙың ағыуын, баҡсаларҙың сәскә атыуын теләйем», — тигән бөркөт.

Теләүен теләгән дә бит. Диңгеҙгә барып һыу алыр өсөн ике мең саҡрым осорға кәрәк икән. Ояға әйләнеп ҡайтыр өсөн тағы ла шул араны үтергә кәрәк. Әммә бөркөт ауырлыҡтан ҡурҡып тормаған, эшкә тотонған. Ярты көн осоп диңгеҙгә етә лә, ял да итеп тормайынса, һыуҙы һоҫоп, кире ашыға икән. Ояһына төндә генә ҡайтып йығыла, ти.

Бер көндө диңгеҙ бөркөткә:

— Ҡайҙа шулай ҡабаланаһың? Ҡал бөгөнгә, ял итерһең, — тип өндәшкән. Тик бөркөт уға:

— Рәхмәт. Әлегә хуш, — тип яуап ҡайтарған. Шунан һыу һоҫоп алған да юғарыға күтәрелгән.

Төньяҡ урманы ла, бөркөттө йәлләп, ҡунып китергә саҡырған. Тик бөркөт урманға:

— Рәхмәт. Әлегә хуш, — тип яуап ҡайтарған. — Мин иртәгә тағы килермен.

Көнбайыштың наҙлы шәфәғе, бөркөткә һонолоп:

— Кил яныма! — тип шыбырлаған. Тик бөркөт уның янынан да туҡтамай осоп киткән.

Көньяҡтың күркәм болондары ла бөркөттө хәл алып китергә саҡырған. Тик бөркөт уларға ла:

— Рәхмәт. Әлегә хуш, — тип яуап ҡайтарған. — Мин иртәгә тағы килермен.

Ә төндәрен бөркөт үҙенең ҡомдағы ояһында бик оҙаҡ йоҡлап китә алмаған. Ҡабат-ҡабат үҙенең көндөҙгө эше тураһында уйлаған. «Мин үҙемә ауыр бурыс алдым. Алһыҙ-ялһыҙ эшләйем, ә эшемдең осо-ҡырыйы күренмәй. Беләм, ҡалған яҡтар бик матур. Тик мин тыуған яғымдан айырыла алмайым. Уға диңгеҙҙең һыуын, урмандың йәшеллеген, шәфәҡ балҡышын, болондар наҙын үҙем алып килермен. Бәлки, минән көлөрҙәр, тик маҡсатыма ирешәсәкмен. Ҡасан да булһа бер ваҡыт бөгөнгө ҡомлоҡта шишмәләр сылтырар, урмандар шаулар, емештәр балланыр. Әлегә был бары хыял ғына. Әммә мин арымай-талмай эшләүем менән бәхетлемен!» — тип үҙенең күңелен күтәреп күҙҙәрен йомған.

Әгәр һеҙ ҡояштың үҙенән дә алдараҡ уяна алһағыҙ, күктә бейектә-бейектә хыялына тоғро бөркөттө күрерһегеҙ. Төнө буйы төшөндә сүллекте баҡса итеп күргән ҡош тағы юлға сыҡҡан.

(З. Бураҡаева, Г. Ғиззәтуллина тәржемәһе)

**бөркөт** — орёл
**маҡсат** — цель
**яуап ҡайтарған** — ответил
**бурыс** — обязательство

**күҙ ташлаған** — посмотрел
**теләйем** — хочу

## Кем матурыраҡ?

(Һинд халыҡ әкиәте)

Джамна йылғаһының яры буйында өс бай ҡатын ултырған. Улар, һыу сәсрәтеп, һәр ҡайһыһы үҙ ҡулын маҡтаған.

— Минең ҡулдарым матур, — тигән береһе.

— Минеке лә матур, — тигән икенсеһе.

— Ә минеке һеҙҙең икегеҙҙекенән дә матурыраҡ, — тигән өсөнсөһө.

Шул ваҡыт тамағы ас, аҡһаҡ бер әбей былар эргәһенә килеп туҡтаған да уларҙан ашарға һораған. Ҡатындар уға бер нәмә лә бирмәгәндәр, тик:

— Әбей, әйт әле, беҙҙең ҡайһыбыҙҙың ҡулы матурыраҡ? — тип һорағандар, ти.

— Бер аҙ ашап алайым әле, шунан һуң әйтермен, — тип бышылдаған да әбей үҙ юлына китеп тә барған. Ә был ҡатындарҙан арыраҡ, яр буйында, бер ярлы ҡатын ултырған, ти. Яланда эшләгәнгә уның тәне ҡояшта ҡарағусҡылланып янған. Әбей был ҡатындан хәйер һораған:

— Мин бик асыҡтым, балам. Берәй һыныҡ икмәк табалмаҫһыңмы икән? — тигән ул.

— Ал, инәкәй, ал. Минең аҙыраҡ аҙығым бар. Яртыһын ал! — тип яуап ҡайтарған ярлы ҡатын. Әбей ашаған, һыу эскән дә теге ҡатынға ихлас күңелдән рәхмәт әйт-

кән. Шунан ул ярлы ҡатынды етәкләгән дә әлеге өс бай ҡатын эргәһенә алып килгән.

— Бына хәҙер мин кемдең ҡулы матурыраҡ икәнлеген әйтә алам инде. Тамағы ас, аҡһаҡ әбейҙе ашатҡан был ярлы ҡатындың ҡулдары ҡап-ҡара, ләкин улар һеҙҙең ҡулдарығыҙҙан мең мәртәбә матурыраҡ! — тигән ҡарсыҡ бай ҡатындарға. Шулай тигән дә әбей үҙ юлына китеп барған, ә бай ҡатындары ғәрлектәренән ни эшләргә лә белмәгәндәр.

**бай** — богатый (-ая, -ое)
**ярлы** — бедный (-ая, -ое)
**бер һыныҡ икмәк** — кусок хлеба

**бышылдаған** — шепнула
**ҡарағусҡылланған** — (зд.) загорела

## Башаҡ

(украин халыҡ әкиәте)

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Остоҡай һәм Орсоҡай исемле ике сысҡан менән Яңғыраубай исемле әтәс. Сысҡандарҙың барлыҡ шөғөлө йырлау ҙа бейеү, шаярыу ҙа көлөү икән. Ә әтәс таң һарыһы беленеү менән тора ла бөтәһен дә зыңлап торған тауышы менән ҡысҡырып уята һәм эшкә тотона, ти.

Бер көндө ишек алдын һеперep йөрөгәндә ерҙән бойҙай башағы табып ала.

— Остоҡай, Орсоҡай, — тип саҡырып алған уларҙы Яңғыраубай. — Ҡарағыҙ әле, бына мин нимә таптым!

Сысҡандар йүгереп килеп еткәндәр ҙә:

— Башаҡты һуғып, бойҙайын йыйып алырға кәрәк! — тип ҡысҡырып ебәргәндәр бер тауыштан.

— Ә кем һуғыр? — тигән Яңғыраубай.
— Тик мин түгел! — тигән береһе.
— Тик мин түгел! — тигән икенсеһе.
— Ярай, — тигән әтәс, — үҙем һуғырмын.
Яңғыраубай эшкә тотонған. Ә сысҡандар уйындарын дауам иткән.
Әтәс башаҡты һуғып, бойҙай әҙерләгән һәм сысҡандарҙы саҡырған:
— Әй, Остоҡай, әй, Орсоҡай, ҡарағыҙ әле, бер башаҡтан күпме бойҙай сыҡты!
Сысҡандар йүгереп килгәндәр ҙә бер тауыштан:
— Ә хәҙер бойҙайҙы тирмәнгә алып барып, он итеп тарттырып алырға кәрәк! — тип ҡысҡырып ебәргәндәр.
— Ә кем алып барыр? — тип һораған әтәс.
— Тик мин түгел! — тигән Остоҡай.
— Мин дә түгел! — тип ҡысҡырған Орсоҡай.
— Ярай, тирмәнгә үҙем барырмын, — тигән Яңғыраубай.
Бойҙай һалынған тоҡто әтәс тирмәнгә алып киткән.
Ә был мәлде сысҡандар тәкмәс ата-ата уйнайҙар, күңел асалар, ти.
Әтәс тирмәндән ҡайтҡас, сысҡандарҙы үҙе янына саҡыра икән:
— Остоҡай, әйҙә! Орсоҡай, әйҙә! Мин ондо алып ҡайттым!
Сысҡандар йүгереп килеп етер-етмәҫтән әтәсте маҡтарға керешкәндәр:
— Эй, шәпһең дә инде үҙең, Яңғыраубай! Ай-ай, шәпһең! Ә хәҙер ҡамыр баҫырға ла бәлеш бешерергә кәрәк!
— Кем ҡамыр баҫа? — тип һораған әтәс.
— Тик мин түгел! — тип сыйылдаған Остоҡай.

— Тик мин түгел! — тип сыйылдаған Орсоҡай.
— Ярай, тағы үҙемә эшләргә тура килә инде!
Әтәс ҡамыр баҫҡан да, утын әҙерләп, мейес яғып ебәргән. Мейес әҙер булғас та ҡамырҙан бәлеш яһап, бешерергә ҡуйған.
Ә сыҫҡандар һаман рәхәтләнеп күңел асҡан. Улар йырлайҙар, бейейҙәр икән.
Шул арала бәлеш бешеп тә сыҡҡан. Әтәс бәлеште мейестән алыуы булған, сыҫҡандар йүгерешеп килеп тә еткән.
— Эй, асыҡтырған бит, әй, — тигән Остоҡай.
— Эх, ҡорһаҡ асҡан бит, — тип сыйылдап ебәргән Орсоҡай.
Әрһеҙләшеп өҫтәл артына килеп тә ултырғандар, ти.
— Тороп тороғоҙ әле! Тәүҙә әйтегеҙ: кем башаҡты тапты?
— Һин таптың! — тип ҡысҡырғандар сыҫҡандар.
— Ә кем уны тартып он итте? — тип һораған Яңғы-раубай.
— Һин... — тигәндәр улар тауыштары сығыр-сыҡмаҫ.
— Кем ҡамыр баҫып, бәлеш яһаны? Утын ташыны? Мейес яҡты? Бәлеш бешерҙе? Ә?
— Һин, һин. Бөтәһен дә һин эшләнең... — тигәндәр Остоҡай менән Орсоҡай ишетелер-ишетелмәҫ кенә. Һәм күҙ асып йомғансы өҫтәл аҫтындағы иҙән ярығына инеп юғалғандар.

**башаҡ** — (зд.) колосок
**тирмән** — мельница
**он** — мука

**ҡорһаҡ асыу** — (зд.) проголодаться
**ҡамыр баҫыу** — замесить тесто
**һуғыу** — (зд.) молотить

# Башҡортса-русса һүҙлек

## А

**ағас ҡырҡыусылар** — лесорубы
**аҙ** — мало
**аҙна** — неделя
**аҡса** — деньги
**аҡыл** — ум
**Аҡыл эйәһе** — мудрец
**аҡыллы** — умный (-ая, -ое)
**алғы тештәр** — передние зубы
**алдашырға ярамай** — нельзя обманывать
**алйырҙан** — хомяк
**алмашына** — сменяется
**алсаҡ кеше** — приветливый человек
**алыҫтан** — издалека
**аптырап бөткәндәр** — замучились
**аптырап китте** — удивились
**аптырап ҡарап ҡатты** (фраз.) — от удивления застыл
**ара** — расстояние
**ата-әсәһен тыңлай** — слушается родителей
**атҡаҙанған** — заслуженный (-ая, -ое)
**ауыҙҙарын асып** — разинув рты
**ауыҙында һүҙ тормай** (фраз.) — болтливая
**ауыл** — деревня, село
**ауыл тормошо** — деревенская жизнь
**ауыр** — трудный (-ая, -ое), тяжёлый (-ая, -ое)
**ауырып китеү** — заболеть
**ауышлыҡ** — наклон
**ашап туйҙы** — наелся
**аяҙ** — ясный (-ая, -ое), безоблачный (-ая, -ое)
**аяҡ кейемдәрен алыу** — убирать обувь

## Б

**баҙыҡ йондоҙ** — яркая звезда
**бай** — богатый (-ая, -ое)
**баҡса үҫтерәләр** — выращивают сад
**бала саҡ** — детство
**балаҫ** — (зд.) коврик
**батша** — царь
**батшабикә** — царица
**батыр** — храбрый (-ая, -ое)
**баш ҡала** — столица
**башаҡ** — (зд.) колосок
**Башҡортостандан ситтә** — за пределами Башкортостана
**беҙҙекенән** — от нашего
**белем** — знание
**Белем байрамы** — День знаний
**беренсе ҡыңғырау** — первый урок
**бер ни өндәшмәйҙәр** — ничего не говорят (молчат)
**бер һыныҡ икмәк** — кусок хлеба
**бер тигеҙ** — одинаково
**берәү ҙә юҡ ине** — никого не было
**бесән** — сено
**бешерә** — варит
**бик борондан** — с древних времён
**билдәле** — известный (-ая, -ое)
**боҙоҡ** — испорченный (-ая, -ое)
**бойҙай** — пшеница
**болдор** — крыльцо
**болотло** — пасмурный (-ая, -ое)
**бөйөк** — великий (-ая, -ое)
**бөркөт** — орёл
**бөтөнләй** — совсем
**бөтәһе лә** — все
**бөтәһе лә көлөп ебәрҙе** — все засмеялись

**буй** — рост
**булды** — был
**булыу** — быть
**бурһыҡ** — барсук
**бурыс** — обязательство
**буш ваҡыт** — свободное время
**бүләк итә (-м)** — дарит, дарю
**бында** — здесь
**бысранған һауа** — загрязнённый воздух
**бышылдаған** — шепнула
**быяла** — стекло
**бәрәмәс** — ватрушка
**бәхет** — счастье
**бәхәсләшеү** — спорить
**бәхәсләшә** — спорит

## В

**вәт ҡыҙыҡ** — вот интересно

## Ғ

**ғалим** — учёный
**ғилми** — научный (-ая, -ое)
**ғорурланам** — горжусь
**ғәҙәт** — привычка
**ғәзиз** — дорогой (-ая, -ое)

## Д

**диңгеҙ бөркөтө** — морской орёл
**диңгеҙ караптары** — морские судна
**диңгеҙ сиктәре** — морские границы
**донъя** — мир

**дөйә** — верблюд
**дуҫлыҡ** — дружба

## Е

**егәрле** — трудолюбивый (-ая, -ое)
**ел** — ветер
**еңеүсе** — победитель
**еп** — нитка
**епшек көн** — слякотный день
**Ер шары** — земной шар
**ерҙән** — по земле
**етеҙ** — быстрый (-ая, -ое)
**етеҙ үрмәләргә** — быстро карабкаться

## З

**заманса** — современный (-ая, -ое)
**зыян** — вред

## И

**иҙән һепереү** — подметать пол
**изге төшөнсә** — святое понятие
**изгелек** — добро
**илен һаҡларға** — защищать родину
**имен-аман килеп сыҡҡан** — вышли живыми и здоровыми
**итәғәтле** — вежливый (-ая, -ое)

## Й

**йөрәк** — сердце
**йыйыу** — собирать
**йылға булып** — рекой
**йылы юрған** — тёплое одеяло

**йыртылды** — порвались
**йыя** — собирает
**йәбешә** — прилипает
**йәйге биатлон** — летний биатлон
**йәйғор** — радуга
**йәнлектәрҙең өңдәре** — жилища зверей
**йәшен** — гроза, молния
**йәшник** — ящик

## К

**кейә** — надевает
**кейеп ҡара** — примерь
**келәм** — ковёр
**кер йыуыу** — стирать бельё
**килешә** — идёт, подходит, к лицу
**киләсәктә** — в будущем
**киңлек** — ширина
**кис көнө** — вечером
**киҫәк** — кусок
**китапҡа күңел һала** — любит книгу
**класташ** — одноклассник
**көл** — зола
**көлкөлө хәл** — забавный случай
**көлтә ҡойроҡ тейен** — белка с пышным хвостом
**көнбайыш** — запад
**көнсығыш** — восток
**көньяҡ** — юг
**көршәк** — горшок
**көс бирә** — придаёт силы
**көслө** — сильный (-ая, -ое)
**күҙ ташлаған** — посмотрел
**күҙҙәрен ҡаплаған** — прикрыла глаза
**күҙҙәрен сылт-сылт йома** — часто моргает

**күҙәтә** — наблюдает
**күҙәтәм** — наблюдаю
**күктән** — по небу
**күмде** — закопала
**күмер** — уголь
**күн** — кожаный (-ая, -ое)
**күңелле** — (зд.) весело
**күңелһеҙ хәл** — печальный случай
**күп** — много
**күп һөйләргә ярамай** — нельзя много болтать
**күрҙем** — увидел (-а)
**күреү** — видеть
**күрмәгән** — не заметила
**Күрһәтәйемме?** — Показать?
**күрше** — сосед
**күсереү** — (зд.) переписать
**күсмә ҡоштар** — перелётные птицы
**кәштә** — полка

## Ҡ

**ҡабып йотор ине** — проглотил бы
**ҡағиҙә** — правило
**ҡағыҙ** — бумага
**ҡала** — город
**ҡала сите** — окраина города
**ҡала ситендә** — на окраине города
**ҡалтыраны** — задрожал
**ҡамыр баҫыу** — замесить тесто
**ҡапыл борола** — резко поворачивается
**ҡар өҫтөндә** — на снегу
**ҡарағусҡылланған** — (зд.) загорела
**ҡарарға яратам** — люблю смотреть
**ҡарға** — ворона

**ҡаршы** — (зд.) напротив
**ҡасаба** — посёлок
**ҡатнаша** — участвует
**ҡаушап ҡалды** — растерялась
**ҡойроҡ алыҫтан күренә** — хвост виден издалека
**ҡойроҡ осо** — кончик хвоста
**ҡомһоҙлоҡ** — жадность
**ҡоромло** — в саже
**ҡорһаҡ асыу** — (зд.) проголодаться
**ҡотҡарҙы** — спас
**ҡоштар китеүе** — отлёт птиц
**ҡулланалар** — используют
**ҡунаҡ** — гость
**ҡунаҡҡа** — в гости
**ҡура** — двор (хлев)
**ҡурҡыныс янамай** — опасность не угрожает
**ҡурсаҡ** — (зд.) куколка
**ҡурсаулыҡ** — заповедник
**ҡусҡар** — улитка
**ҡуша** — велит
**ҡушамат** — кличка
**ҡушты** — велел (-а)
**ҡыҙыҡлы** — интересный (-ая, -ое)
**ҡыҙыҡлы хәл** — интересный случай
**Ҡыҙыл кәләпүш** — Красная шапочка
**ҡып-ҡыҙыл булды** — покраснел
**ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙырырға ярамай** — нельзя разорять муравейники
**ҡырмыҫҡа ояһы** — муравейник
**ҡыҫҡа** — короткий (-ая, -ое)
**ҡышҡы һыуыҡ** — зимний мороз
**ҡышҡылыҡҡа** — к зиме
**ҡәҙерле** — дорогой (-ая, -ое)

## М

**мажаралар** — приключения
**майҙан** — площадь
**маймыл** — обезьяна
**маҡсат** — цель
**маҡсат ҡуйыу** — ставить цель
**маҡсатҡа ирешеү** — добиться цели
**маҡтана** — хвастается
**маҡтаныу** — хвастаться
**мал тоталар** — держат скотину
**матурлыҡ** — красота
**мауыға** — увлекается
**махсус** — специальный (-ая, -ое)
**милли парк** — национальный парк
**минең, минеке** — мой (моя, моё)
**минең ауыл** — моя деревня (село)
**мираҫ** — наследство
**мотлаҡ** — обязательно
**мотоуҙыш** — мотогонки
**мөйөш** — угол
**мығырлап-мығырлап ҡараған** — поворчал
**мыштым** — (зд.) тихо
**мәғлүмәт** — информация
**мәҡәлә** — статья
**мәмерйә** — пещера

## Н

**насар ғәҙәт** — плохая привычка
**нигеҙ һалған** — основал
**нөктә** — точка

## О

**оҙон** — длинный (-ая, -ое)
**оҙонлоҡ** — длина
**оҡшай** — нравится
**оҡшарға тырышам** — подражаю
**он** — мука
**осор** — время, период
**осорға** — летать
**осороп ҡарайбыҙ** — испытываем в полёте
**ошо көндө** — в этот день

## Ө

**өйрөлә** — крутится, кружится
**өйрәнергә теләйҙәр** — желают изучить
**өйрәтермен** — научу
**өндәү билдәһе** — восклицательный знак
**өс тапҡыр** — (зд.) трёхкратный

## Р

**ризаһыҙлыҡ** — несогласие
**рөхсәт ителмәй** — не разрешается
**русса ғына** — только по-русски
**рәнйетмәй** — не обижает
**рәхәт** — хорошо

## С

**сағыу** — яркий (-ая, -ое)
**салбар** — брюки
**сандыр кәүҙәле** — худощавый
**саф һауа** — свежий воздух
**серей** — гниёт
**сигеү** — вышивание

**сик** — граница
**сиктәш булыу** — граничить
**сиратлашып** — по очереди
**соҡор** — яма
**солан** — чулан (сени)
**сөнки** — потому что
**сүллек** — пустыня
**сүп** — мусор
**сығанаҡ** — источник
**сығарылыш кисәһе** — выпускной вечер
**сынығабыҙ** — закаляемся
**сәйәхәт итеү** — путешествовать
**сәүкә** — галка

## Т

**табынам** — поклоняюсь
**таҙа тота алмайым** — не могу содержать в чистоте
**тамыр** — корень
**таныш** — (зд.) знакомо
**тап-таман** — как раз, впору
**тарихи** — исторический (-ая, -ое)
**тарлауыҡ** — ущелье
**татыу** — дружный (-ая, -ое)
**татыу йәшәү** — дружно жить
**тау башында** — на вершине горы
**ташбаҡа** — черепаха
**ташлаған** — бросил
**телевизор ҡоло** — раб телевизора
**теләйем** — хочу
**тешем-тырнағым менән йәбешеп** (фраз.) — изо всех сил
**тешен таҙарта** — чистит зубы
**тиҙ, шәп** — быстро

**тин** — копейка
**тирмән** — мельница
**тирә-яҡ мөхит** — окружающий мир
**тоғро** — верный (-ая, -ое)
**томан** — туман
**төйөн** — узел
**төньяҡ** — север
**төргәк** — свёрток
**төрлө материалдан** — из разного материала
**төҫ** — цвет
**төҫлө ептәр, мулинә** — мулине
**төшөнмәгән** — (зд.) не поняли
**туған** — 1) родственник; 2) брат или сестра
**туҙҙырыу** — (зд.) тратить
**туҡталыш** — остановка
**тунын алмаштыра** — меняет мех
**тура** — прямо
**тураһында** — (послелог) о
**түбәм күккә тейгәндәй булды** (фраз.) — очень обрадовался (-ась)
**түкте** — вылил
**түңәрәк өҫтәл** — круглый стол
**тығыҙ бәйләнеш** — тесная связь
**тынысландырған** — успокоила
**тыңламай** — не слушаются
**тырма** — грабли
**тыуған йорт** — родной дом
**тәбиғәт һәйкәле** — памятник природы
**тәкмәс атыу** — кувыркаться
**тәрбиәле** — воспитанный (-ая, -ое)
**тәртип** — порядок
**тәрәнлек** — глубина
**тәтәй күлдәк** — красивое платье

## У

**уйын** — игра
**уйынсы** — игрок
**уҡырға сат йәбеште** (фраз.) — принялся усердно читать
**уның, уныҡы** — его (её)
**уңайлы** — (зд.) удобно
**уңайлы** — удобный (-ая, -ое)
**уңыштар теләй** — желают успехов
**урап сыға** — обходит
**уртаҡ йорт** — общий дом
**урын бирә** — уступает место
**ус төбө** — ладошка
**ут** — огонь
**утрау** — остров
**уттар** — огоньки
**утын ярыу** — колоть дрова
**уятты** — разбудил (-а)

## Ү

**үҙ донъяһы** — свой мир
**үҙ күсәре тирәләй әйләнеү** — вращение вокруг своей оси
**үҙемә** — себе
**үҙәк** — центр
**үлсәм** — размер
**үҫкәс** — когда вырасту

## Ф

**файҙа** — польза
**фән** — наука

## Х

**хаҡ** — цена
**халыҡ** — народ
**хат** — письмо
**хеҙмәт иткән** — служил
**хоккейсы** — хоккеист
**хурлыҡ** — позор
**хыял** — мечта
**хыяллана** — мечтает
**хәл белеү** — проведать
**хәстәрлек күреү** — заботиться

## Һ

**һабаҡ** — стебель
**һағынабыҙ** — скучаем
**һайлай(-ым)** — выбирает, выбираю
**һаҡларға кәрәк** — надо беречь
**һалам** — солома
**һанашмаҡ** — считалка
**һатып ала(-м)** — покупает, покупаю
**һеркәләндерәм** — опыляю
**һиҙеп ҡалдылар** — заметили
**һиҙеү** — чувствовать
**һиҙмәй ҡалғанмын** — не заметила
**һинең, һинеке** — твой (твоя, твоё)
**һинеңсә** — по-твоему
**һипкел** — веснушки
**һоҡланам** — восхищаюсь
**һондо** — протянул
**һорау билдәһе** — вопросительный знак
**һоро** — серый (-ая, -ое)
**һөйләм** — предложение
**һөйләне** — рассказал (-а)
**һөйөндөрә** — радует

**һуғыу** — (зд.) молотить
**һуғыш** — война
**һум** — рубль
**һыуға барыу** — пойти за водой
**һыуҙа батыусы** — утопающий
**һәйкәл** — памятник
**һәр ваҡыт** — всегда

## Ш

**шалҡан** — репа
**шарлауыҡ** — водопад
**шатланып** — с радостью
**шауларға ярамай** — нельзя шуметь
**шахмат уйнау** — играть в шахматы
**шахмат ярышы** — соревнование по шахматам
**шым ғына** — тихонько
**шәп шөғөл** — замечательное занятие

## Ы

**ыҫмала** — смола
**ыҫмала төҫлө ҡара сәсле** — волосы чёрные как смола

## Э

**эйелгән** — наклонилась
**энә** — иголка
**эҫе** — жарко
**эшләү** — работать, зарабатывать

## Ә

**әҙерләнә** — готовится
**әҙәпле** — порядочный (-ая, -ое)
**әйләнмәй** — не крутится

**әйләнә** — вращается
**әйтелгән һүҙ** — сказанное слово
**әкиәт** — сказка
**әҫәрҙәр** — произведения

## Ю

**юғалмайҙар** — не теряются
**юҡ-барҙы тыңламаҫҡа** — не слушать чепуху
**юлдаш** — спутник

## Я

**ягымлы тауыш** — нежный голос
**яҙыусы** — писатель
**яҡшыраҡ** — лучше
**ял итеү** — отдыхать
**ял көндәре** — выходные дни
**ялҡау** — ленивый (-ая, -ое)
**ялтырауыҡ таштар** — стразы
**ямғыр** — дождь
**янғын** — пожар
**яңылыштырабыҙ** — запутываем
**ярҙам итер ине** — помог бы
**ярҙам итәм** — помогаю
**ярлы** — бедный (-ая, -ое)
**яуап ҡайтарған** — ответил

# Йөкмәткеһе

**1. Көн дә мәктәпкә барам**
1) Беренсе сентябрь — Белем көнө! Үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . 3
2) Мин мәктәпкә ни өсөн йөрөйөм? Һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
3) Мин ниндәй дәресте яратам / яратмайым? Һөйләм . . . . . . . . . . . . . 7
4—5) Мин нимә уҡырға яратам? Исем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 10
6) Мәктәптәге дуҫтарым менән таныштырайыммы? Исем . . . . . . . . . 14
7—8) Беҙ мәктәптә нимә тураһында һөйләшәбеҙ? Исем . . . . . . . . . . .16
9) Телмәр үҫтереү. Исем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 22

**2. Мин ғаиләмде яратам**
10) Беҙгә бергәләп күңелле. Сифат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 24
11—12) Мин — тәрбиәле бала. Сифат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 26
13) Минең өйҙәге бурыстарым. Сифат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 30
14—15) Минең яратҡан шөғөлөм. Сифат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 33
16) Мин йәшәгән бүлмә. Сифат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 37
17) Минең кескәй дуҫтарым. Сифат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 38

**3. Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем**
18) Мин йәшәгән Ер. Алмаш. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 41
19) Мин йәшәгән йорт/район. Алмаш. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 43
20) Минең күршеләрем. Алмаш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 45
21) Мин яратҡан урындар. Алмаш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 47
22) Беҙҙең урам/йорт балалары. Алмаш. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 49
23—24) Беҙҙең уйындарыбыҙ. Алмаш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .51

**4. Ауылда/ҡалала йәшәйем**
25—26) Минең тыуған ауылым/ҡалам. Һан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 55
27—28) Ауыл һәм ҡала тормошо. Һан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 59
29) Ҡалалағы һәм ауылдағы эштәр. Һан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 63
30—31) Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары. Һан. . . . . . . . . . . 64
32—33) Тыуған ерем мөғжизәләре. Һан. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 68
34) Телмәр үҫтереү. Һан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 72

**5. Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ**
35—36) Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә? Рәүеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 74
37—38) Йәнлектәр йыл миҙгелен беләме? Рәүеш. . . . . . . . . . . . . . . . . 78
39—40) Бөжәктәр нисек йәшәй? Рәүеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 83

41—42) Һауа торошон белеү ниңә кәрәк? Рәүеш . . . . . . . . . . . . . . . . 88
43—44) Киләсәктә тәбиғәттә үҙгәрештәр буламы? Рәүеш. . . . . . . . . . 92

**6. Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ**
45—46) Минең тормошомдағы ҡыҙыҡлы хәлдәр. Ҡылым. . . . . . . . . . . 96
47) Мажаралар илендә. Ҡылым. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 99
48) Минең иң ҙур хыялым. Ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .101
49—50) Минең кумирҙарым. Ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .103
51) Телмәр үҫтереү дәресе. Ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .107

**7. Һатып алырға өйрәнәм**
52—53) Минең бюджет. Ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .108
54—55) Мин кейем һатып алам. Ҡылым. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .112
56) Мин модалы кейем яратам. Ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .117
57—58) Бүләк һайлайым. Ҡылым. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .118
59) Телмәр үҫтереү. Ҡылым. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .122
Уҡыу өҫтән материал . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .124
Башҡортса-русса һүҙлек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .136

Учебное издание

**Давлетшина** Мархаба Саяфаровна
**Кинзябаева** Нафиса Наилевна
**Садыкова** Гульназ Мухаметовна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

**Учебное пособие для 4 класса для изучения башкирского языка (как государственного) в общеобразовательных организациях с русским языком обучения**

(на башкирском и русском языках)

Редакция мөдире Г. А. Раянова
Мөхәррире Ә. А. Баһаманова
Рәссамы А. Ә. Василов
Биҙәлеш мөхәррире А. Р. Мөхтәруллин
Техник мөхәррире Г. Р. Исхаҡова
Корректорҙары А. Х. Хәкимова, Л. Ф. Саниева

Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.10.2017. Форматы 70×90 $^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. JournalSans гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 11,11+0,29 форз. Шартлы буяу отт. 46,21. Иҫәп-нәшер таб. 4,35+0,48 форз. Тиражы 30 560 дана. Заказ 1.0199.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.


ынйы сәскә
күгәрсен күҙе
ҡәнәфер
ҡайын
ҡарағай
саған
умырзая
ләлә
роза
йүкә
миләш
имән